ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28-4 июнь - июль (һөтай - майай)

2024

№25 (1118)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Әл Иҙриси басджирттары,**
йәғни XII быуатта Европаға билдәле Башҡорт иле тураһында



7

**Белемлеләр күккә ашыр,**
йәки Бала мәктәпкә тиклем үк уҡырға өйрәнһенме?



8-9

**Салауат рухы сағылышы**



11

**Рухи юлбашсыбыҙ булды**



12-13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*Дин ғилемендә, дини китаптарҙа, Ҡөрьән-Кәримдә лә был өс нәмә тураһында яҙылмаған, ләкин был өс нәмә диндә лә һаҡлай. Улар - милли тел, милли кейем, милли йолалар.*

***Сәхифәнән.***

*АФАРИН!*

# БАЛАЛАР ТЕЛЕНДӘ...

## Урал батыр васыяты

**"Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ", тигән хаҡ һүҙҙәрҙең асылын аңлаған һәм шуға инанған, ата-бабаларының был аманатына тоғролоҡто күңелдәрендә йөрөткән балалар ошо көндәрҙә баш ҡалабыҙҙа йыйылды. Аңлағанһығыҙҙыр, улар - "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр, егерме алтынсы тапҡыр ойошторолған төбәк-ара конкурста ҡатнашыусылар.**




Быйыл конкурстың йомғаҡлау этабында республикабыҙҙан эпосты яңғыҙ башҡарыусыларҙан 53 бала, 17 фольклор коллектив ҡатнашты. Конкурстың төп бүләген - Гран-прины был юлы "Урал батыр" эпосын тулыһынса ятлаған шәп ике ҡыҙ бүлеште: Ишембай районының Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 8 класс уҡыусыһы Яҙгөл Хәйруллина менән Белорет ҡалаһының Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһының 11-се класс уҡыусыһы Регина Ғәлиева **(һүрәттә)**. Улар бүләккә "тимер Аҡбуҙат" - велосипедтар алып һөйөнде. Енеүсе ҡыҙҙар ярыш барған ике көндөң дә күңелле үтеүен, ойоштороусылар уҙғарған квиз уйыны, БР Милли музейына экскурсия күңелдәренә ятыуын һөйләне. Яҙгөл Хәйруллина әйтеүенсә (уның тураһында гәзитебеҙҙең 24-се һанында баҫылған "Балалар ҡоро"нда ла уҡып белә алаһығыҙ), был еңеүе уның өсөн ҡыуаныслы ла, көтөлмәгән дә булған. "Тәрлә ярыштарҙа ҡатнашам, әммә "Урал батыр" эпосын башҡарыусылар конкурсында мөхит икенсе төрлә, бында рух күтәрелә, тел байлығы арта. Быйыл да бик матур сығыштар булды. Бөтәһен дә ҡарап өлгөрмәнем, шулай ҙа коллектив менән сәхнәләштереүселәр араһында бөрйәндәрҙең сығышы, яңғыҙ башҡарыусыларҙан үҙебеҙҙең Ишембайҙан килгән Искәндәр Лотфуллин, Наҙгөл Сәйфетдинова, минең менән Гран-прины бүлешкән Регина Ғәлиеваның сығыштарын һоҡланып күҙәттем. Был конкурста ҡатнашырға теләгән тиҫтерҙәремә башҡорт телендә һөйләшергә, эпосты тәрәндән белергә һәм фәлсәфәһенә төшөнөргә тырышырға, тулыһынса ятларға кәңәш итәм. Мин бында икенсе тапҡыр ҡатнаштым, эпосты былтыр уҡ тулыһынса ятлағайным", - тине Яҙгөл һәм етәксеһе, гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханованың, ойоштороусыларға рәхмәтен дә еткерҙе.

Әбына быйыл мәктәпте тамамлаған Регина Ғәлиева был конкурсты 4-се кластан алып ҡалдырғаны юҡ икән. "Һисәнсе тапҡыр ҡатнашһам да, һис кенә лә ялҡытмай был ярыш. Сөнки бында дуҫлыҡ хөкөм һөрә, йылдан-йыл дуҫтарым күбәйә, ошондай сараларҙа осрашып торабыҙ. Минә "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы үҙ юлымды табырға ярҙам итте. Оҙаҡ йылдар килгән еңеүгә бик шатмын", - тип тәьҫораттары менән бүлеште ҡыҙ. Уның етәксеһе, Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Сәриә Ҡаһарманова балаларға эпосты ятлатыу серҙәре менән бүлешеп, был эште беренсе кластан уҡ башлауы, бөтә класс менән дәрестең тәүге 3-5 минутында "Урал батыр" юлдарын ҡабатлауҙарын һөйләне. Башланғыс класты тамамлауға балалар әҫәрҙең 500-700 юлын яттан белә, улар араһынан иң һәләтлеләрен артабан ярыштарға әҙерләй икән педагог.

Әйткәндәй, эпосты яңғыҙ һөйләүселәр араһында I урынды Өфө ҡалаһының "Аҡбуҙат" 75-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Йәсминә Лоҡманова, Ишембай ҡалаһының Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатынан Искәндәр Лотфуллин, Баймаҡ районы Сәйгәфәр урта мәктәбенән Зөһрә Солтанова, Баҡалы районы Мостафа урта мәктәбенән Миләүшә Дусиева яуланы.

Ә бына II урынды Өфө ҡалаһының 18-се Башҡорт балалар баҡсаһынан Йәсминә Рамаҙанова, Ишембайҙың Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатынан Наҙгөл Сәйфетдинова, Көйөргәҙе районы Яҡшымбәт урта мәктәбенән Айзилә Саттарова, Туймазы ҡалаһының 7-се урта мәктәбенән Алина Шәйбәкова үҙ-ара бүлеште. III урынға Йылайыр районы Юлдыбай ауылының "Ләйсән" балалар баҡсаһынан Ғәзинур Хамматов, Бөрйән районы Яңы Собханғол ауылының төп дөйөм белем биреү мәктәбенән Ильяна Ҡарағолова, Әбйәлил районы Красная Башкирия урта мәктәбенән Айсар Әхмәтшин, 1-се Республика полилингваль күп профилле гимназиянан Линар Ҡасимов яуланы.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТИҘҘӘН БАШЛАНА!



**Өфөнөң Әр-Рәхим мәсетенә манара төҙөү эшен тамамлау өсөн грек мәрмәренән эшләнгән изделиеларҙың беренсе партияһы килтерелде.**

Тиҙҙән фасадты биҙәү башлана. Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин хәбәр итеүенсә, тағы ла алты йөк машинаһы мәрмәр килтерергә тейештәр. "Күңелдә шатлыҡ һәм рәхмәт хистәре, сөнки беҙ тарихи ваҡиғаның шаһиттары булып торабыҙ. Тормошобоҙҙа ике бөйөк байрам - Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары бар. Тап һуңғы Ураҙа байрамы ваҡытында хөрмәтле Радий Фәрит улының тырышлығы менән Әр-Рәхим мәсете төҙөлөшө әүҙемләште. Бына әле Ҡорбан байрамы алдынан мәрмәрҙең тәүге партияһын ҡаршы алдыҡ", - тип хәбәр итте мөфтөй Айнур Бирғәлин.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбиров Ураҙа байрамы уңайынан социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Әр-Рәхим мәсетендә тикшереү һәм юридик эштәрҙең тамамланыуы, проект-смета документацияһының тулыһынса тергеҙелеүе һәм уның экспертиза үтеүе тураһында яҙғайны. Мәсет төҙөлөшө барышын Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының рәсми ресурстарында күҙәтеп барырға мөмкин.

12+

**✓ Июлдең икенсе яртыһында һауа температураһы 28 градусҡаса эҫе тороуы фаразлана. Ни тиһәң дә, йәй үҙәге - тап иген һәм башҡа культураларҙың бешеп, утыға торған мәле. Уларға эҫе көндәр ҙә, яуым-төшөм дә бик кәрәк.**



УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ



# ЭҘЛӘГӘНЕБЕҘҘЕ ТАПТЫҠ...

**XX быуаттың 80-се йылдары аҙағында суверенитет, үҙаллылыҡ яулап күтәрелгәндә бик күп милләттәштәребеҙҙең төптә ойоп ятҡан милли рухы уянды. Рухты уятыуҙа башҡорт телендә даими һәм ваҡытлыса сығарылған гәзит-журналдарҙың йогонтоһо баһалап бөткөһөҙ булды. Ҡайһы бер баҫмалар ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыла торғайны.**

Шул йылдарҙа республика райондарында бер-бер артлы башҡорт телендә гәзиттәр нәшер ителә башланы. Әммә Өфөлә 100 мендән ашыу башҡорт йәшәп тә, улар өсөн баш ҡаланың үҙенең башҡорт телендәге гәзите сыҡмауы күптәрҙе уйландыра торғайны. Һәм, ниһайәт, берҙәм уй менән янған милләттәштәребеҙҙең изге уй-теләктәре тормошҡа ашты. Асфальтты ярып сығып донъяға баҡҡан сәскә шикелле булды "Киске Өфө" гәзите ойошторолоу, ул баш ҡаланы ғына түгел, ә бөтә башҡорт донъяһын аң һәм ғилем нурына сорнатты. Был күренеште мин үҙем бик оҙаҡ ҡоролоҡтан һуң тере һыуға сарсаған тәбиғәтте дым менән туйындырған көтөп алынған шифалы ямғырға тиңләйем. Ысынлап та, шулай. Халыҡ араһында "Һин ишеттеңме?", "Күрҙеңме?", "Уҡыныңмы?" тигән һорауҙар ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа, өйҙән-өйгә, ауылдан-ауылға, ҡаланан-ҡалаға таралды. Ул гәзит биттәренән ҡарты ла, йәше лә, түрәһе лә, эшсеһе лә, эшҡыуары ла, эшһеҙе лә эҙләгәнен тапты.

Был донъялағы бөтөн матди күренештәр - ҡасандыр кешеләрҙең башында барлыҡҡа килгән уй-ниәттәрҙең тирә-яҡҡа таралып, күп кешеләрҙең башында эшкәртелеп һәм байытылып, уртаҡ уй булып ойошоу һөҙөмтәһе һәм емеше ул. Ә инде ул емештең тәме, күләме һәм киләсәге ана шул берләшкән уртаҡ уйҙың эшмәкәрлегенә туранан-тура бәйләнгән. Шулай булғас, "Киске Өфө" гәзитенең дә емешле һәм күләмле киләсәге тик үҙебеҙҙең уй-фекеребеҙгә һәм сифатлы эшмәкәрлегебеҙгә бәйләнгән. Әгәр ағас тамырҙарын... төптәрен йомшартып, шифалы һыу һибеп, ваҡытында ҡарап торһаң, ул һине ҡыуандырып, татлы емештәр бирә. Ә инде ул емештәрҙе ысын күңелдән башҡалар менән уртаҡлашһаң, уның төмән татыған башҡалар ҙа ул емеште үҫтерә һәм тарата башлаясаҡ. Үҙҙәре һәм башҡалар өсөн шифалы емешләк үҫтерүселәрҙең донъяға ҡарашы һәм уй-фиғеле яҡшы яҡҡа үҙгәрә.

Шулай итеп, беҙ ҙә "Киске Өфө" гәзитенең эргәһендә изге уйҙар менән тупланып, уға күңел йылыбыҙҙы бирәйек. Һәм унан үҙебеҙгә лә файҙалы нурҙар алып, халыҡ араһына таратһаҡ, йәшәү мәғәнәһен тағы ла нығыраҡ аңлай башларбыҙ. Изге уй-фиғелдәребеҙҙең тормошҡа ашыуын үҙ күҙебеҙ менән күреп ҡыуанырбыҙ.

**Айҙар КҮСЕЕВ.**

БЫЛ АЙҘА...

# АЯҘ КӨНДӨҢ ЙӘШЕНЕНӘН ҠУРҠ

**Йәй - йәмле лә, тәмле лә мәл, ә инде, мәғлүм булыуынса, тәмле нәмә күп булмай. Дөрөҫөн әйткәндә, уның тәүге айы өшөптуңып, икенсе яртыһында "ҡыҙған табала" ҡайнап, үтеп тә китте, шуға күрә йәй башының йәме менән тәмен татырға әллә ни форсат булманы.**



Уның ҡарауы, күҙ асып йомғансы йәй уртаһы - июль килеп еткән, имеш. Әлбиттә, күптәрҙе иң тәүҙә был айҙа һауа торошоноң ниндәй булыуы ҡыҙыҡһындыра, хатта борсойҙор ҙа, сөнки июндәге хәүефле ғәрәсәт, ел-дауыл, көслө йәшенле ҡойма ямғырҙар һәм көйҙөргөс эҫе көндәрҙең ҡабатланыуын бер кем дә теләмәйҙер. Тик шуныһы барыбер ҙә яҡшы булды: үлән-бесән мул үҫте, хатта ишек алдарындағы, баҡсалағы үләнде генә лә ҡайырып сабыу өсөн арыу ғына ҡарыу кәрәк, тейҙәр. Сабынлыҡтарҙа ла үлән бешекләнә, кеше бесәнгә төшә башлар, шуға ла һауа торошоноң тотороҡло тороуы сабылған үләнде тиҙ арала киптереп, күбә-кәбәнгә күтәрә һалырға булышлыҡ итер ине. Ауыл хужалығы коллективтары ла күптән инде мал аҙығы әҙерләй башланы.

Рәсәй метеорология хеҙмәте яңыраҡ был айға һауа торошо мәғлүмәттәрен еткерҙе. Уларҙың күҙаллауынса, июлдә һауа температураһы бер аҙ түбәнәйә төшәсәк: тәүге ун көнлөктә төндә - 14 градус йылы, көндөҙ +21 самаһы тәшкил итәсәк һәм был осорҙа ямғырлы көндәр көтөлә. Икенсе ун көнлөктән башлап көндәр йылына төшһә лә, бәхеткә, гәҙәттән тыш эҫелек күҙәтелмәйәсәк: төндә 17, көндөҙ 24 градус самаһы булыр тип вәғәҙәләй синоптиктар. Ҡайһы бер сығанаҡтар мәғлүмәттәрендә июлдең икенсе яртыһында һауа температураһының 28 градусҡаса эҫе тороуы фаразлана. Ни тиһәң дә, йәй үҙәге - тап иген һәм башҡа культураларҙың бешеп, утыға торған мәле. Уларға эҫе көндәр ҙә, яуым-төшөм дә бик кәрәк. Унан һуң июль йәйге оҙайлы каникулдар, отпускылар мәле; йылға-күл буйҙары, тауурмандар туристар, тәбиғәт ҡосағында ял итеүселәр менән тулы - эйе, был айҙы беҙ тыныс, зәңгәр күк йөҙлө һәм ҡояшлы осор булараҡ яратабыҙ.

Шул уҡ ваҡытта күңелдәребеҙҙә һис бер һиллек юҡ. "Аяҙ көндең йәшененән ҡурҡ", - тигән ғибрәтле әйтеме лә бар бит халҡыбыҙҙың. Яҡында ғына һуғыш уты дөрләй; дошман ҡүктән дә, һыуҙан да, ҡоро ерҙән дә һөжүм итә, буйы етмәгән ерҙәргә шартлатҡыс дрондарын осора... Баҡтиһәң, беҙҙең иң тыныс иҫәпләнгән айыбыҙ календарында ла һуғыш тематикаһына бәйле көндәр байтаҡ икән. Уның тәүге көнө үк ил тарихындағы локаль һуғыштар һәм уларҙың геройҙары хаҡында иҫкә төшөрөп тора: **1 июль** - Хәрби хәрәкәттәр ҡатнашсылары - ваҡытында ҡайнар нөктәләрҙә, шул иҫәптән, Афғанстан һәм Төньяҡ Кавказ һуғыштары, Абхазия, Көньяҡ Осетия, Сириялағы хәрби хәрәкәттәрҙә Рәсәй мәнфәғәттәре өсөн күкрәктәрен ҡуйған, батырҙарса һәләк булған, иҫән ҡалып, бөгөн дә беҙҙең арала йәшәгән ветерандар көнө. Бына шундай парадокс: Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары бик аҙ

НИҺАЙӘТ!

# "ФАНЕРА АҪТЫНДА" ЙЫРЛАУ...

## тамашасыны алдау ул



**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Тамаша-күңел асыу хеҙмәттәре күрһәткәндә ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлауҙы тәьмин итеү маҡсатында Рәсәй Федерацияһының айырым закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль закон проектын әҙерләне һәм Дәүләт Думаһына ҡарауға индерҙе.**

- Закон проекты ҡулланыусының тамаша-күңел асыу хеҙмәттәре тураһында дөрөҫ мәғлүмәт алыу хоҡуғын тәьмин итергә һәм бындай хеҙмәттәрҙең сифатын күтәрергә тейеш, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн беҙ йыш ҡына башҡарыусылар һәм ижади коллективтарҙың менәрләгән тамашасы алдында ла "фанера аҫтында" йырлағанын беләбеҙ. Концертҡа билет һатып алған тамашасы яҡшы сығыш урынына уны "суррогат продукт" көткәнен белмәй. Уның хоҡуҡтары яҡланмаған. Беҙ "плюслы фонограмма" төшөнсәһен нығытырға, башҡарыусыларҙың һәм ойоштороусыларҙың ҡулланыусыларға фонограмма файҙаланыу йәки "тере тауыш" менән башҡарыу тураһында мәғлүмәт биреү бурысын билдәләргә тәҡдим итәбеҙ.

Шулай уҡ закон проекты ошондай мәғлүмәт булмағанда ҡулланыусыларҙың билет өсөн аҡсаһын кире

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы хәбәр итеүенсә, сәйәси партияларҙың Башҡортостан Республикаһы Башлығын һайлауҙа ҡатнашыу өсөн күрһәткән кандидаттарынан документтар ҡабул итеү тамамланды. Үҙәк һайлау комиссияһына биш кандидаттан: Радий Хәбировтан ("Берҙәм Рәсәй"), Владимир Нагорныйҙан ("Ғәҙел Рәсәй - Патриоттар - Хәҡиҡәт өсөн"), Иван Сухаревтан (ЛДПР), Илшат Тимерйәновтан ("Яңы кешеләр") һәм Артур Шәйнуровтан (КПРФ) документтар килде. Кандидаттар теркәлеү өсөн документтарын 2024 йылдың 1 июленән 11 июленә тиклем Үҙәк һайлау комиссияһына тапшырырға тейеш.

✓Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһе Украина режимының Севастополгә террористик атакаһы һәм Махачкала террорсыларҙың һөжүме ваҡытында һәләк булғандарҙы бер минутлыҡ тынлыҡ менән иҫкә алыуҙан башланды. "23 июндә ВСУ Севастополгә Американың биш тактик ракетаһы менән һөжүм итте. 150-нән ашыу кеше яраланған, ҡорбандар бар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар араһында - балалар. Кисә Махачкала һәм Дербент ҡалалары халҡы террористик һөжүмгә дусар булды. Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренең ғүмере өҙөлдө", - тине Радий Хәбиров.

✓Шишмә районында Евразия күсмә цивилизациялар музейы проекты авторҙары - "Архтамға" бюроһы архитекторҙары "Тарихи-мәҙәни туризм өлкәһендә иң яҡшы инновацион проект" номинацияһында алтын награда яуланы. "Әлегә Шишмә районында Евразия күсмә цивилизациялар музейын ойоштороу буйынса тәүге аҙымдар яһайбыҙ. Уның проекты иң абруйлы конкурстарҙың береһендә - "Архитектура мирасы" Бөтә Рәсәй фестивалендә еңеүсе булды", - тип яҙа Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. Республика етәксеһе визит-үҙәген быйыл 6 июлдә асырға йыйыныуҙарын хәтергә төшөрҙө.

✓Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин туғыҙынсы һәм ун беренсе кластар өсөн сығарылыш кисәләренең көнөн әйтте: "Туғыҙынсылар - 2024 йылдың 28 июнендә (йома); ун беренселәр - 2024 йылдың 29 июнендә (шәмбе)". Кисәләрҙе үткәргәндә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен мотлаҡ үтәү кәрәклеген дә иҫкә төшөрҙө ул. Быйыл Башҡортостанда туғыҙынсы класты - 50 мендән ашыу, ә ун беренсе класты 15 менгә яҡын уҡыусы тамамлай. Шулай уҡ уҡыуҙағы айырым ҡаҙаныштар өсөн беренсе йәки икенсе дәрәжә миҙал алырға мөмкин.

✓ ***Айырым осраҡтарҙа, мәҫәлән, концерт майҙансығының үҙенсәлектәренә, һауа шарттарына бәйле "плюс аҫтында" сығыш яһарға мөмкин, әммә сараны ойоштороусылар тамашасыға был хаҡта хәбәр итергә тейеш...***



ҡалды тип моңһоулана инек, әммә яңы заман ил һаҡсыларының ветерандар сафы арта ғына бара - Украиналағы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар ҙа хәҙер ветерандар иҫәбенә индерелә. Эйе, тыныс һыйышып йәшәү теләге генә тыныслыҡ килтермәй. Илебеҙ өлөшөнә шулай яҙғандыр инде: именлек, аяҙ көндәр, азат тормош өсөн туҡтауһыҙ көрәшеп йәшәү; имәндәй ир-егеттәребеҙгә иһә утлы яу юлдарын тапау. Ана шул ғәрәсәттәрҙән имен-аман ҡайтҡандары - тыныслыҡ, тормош ҡиммәте һәм именлек ҡәҙерен йәне-тәндәре менән татыған хәрби хәрәкәттәр ветерандары - бөгөнгәсә берҙәмлек һәм дуҫлыҡ традицияларына тоғролоҡ һаҡлап йәшәй: уларҙың йыл һайын йыйылышып, осраша торған матур ғәҙәттәре бар. Үткән быуын ветерандары кеүек үк, улар ҙа балалар, йәштәр менән йыш осраша, йәш быуында илһөйәрлек рухы тәрбиәләүҙә ҡатнаша.

Артабан иҫтәлекле календарҙың 6-һында Башҡорт эскадроны булдырыу тураһында 1874 йылда император Александр Икенсенең Указ сығарыуына 150 йыл тулыуы билдәләнә. Хәйер, уға тиклем дә башҡорттоң йәйәнән атылған уҡ тиҙлегендә хәрәкәт итеүсе осҡор һыбайлылары ил сиктәрен һаҡлауҙа рус батшалығына тоғро хеҙмәт итә, Рәсәй алып барған бөтөн һуғыштарҙа ла ҡатнаша. 17-се быуат аҙағынан алып, башҡорттар хеҙмәткә эре отрядтарға берләштерелеп, даими нигеҙҙә йәлеп ителә. 1714 йылда 1000 башҡорт Себер ҡалалары төҙөлөшөн һаҡлаһа, 1736 йылда Төркиә менән һуғышҡа - 3000 һыбайлы, шул уҡ һандағы атлы яугир 1756-1763 йылғы Ете йыллыҡ һуғышта ҡатнаша. Кантон системаһы индерелгәс, башҡорттар йыл һайын хеҙмәткә 5 413 яугир ебәрергә тейеш була. Ә инде 1812 йылғы Ватан һуғышында 28 атлы полк менән ҡатнашып, Парижға барып ингән "төньяҡ амурҙары" хаҡында бөтөн донъяға билдәле. Атлы булмаһа ла, бөгөн дә башҡорт балаһы ил ҡайҙа ҡушһа, шунда күпләп хеҙмәт итә, ләкин йәшләй генә баштарын һалғандар араһында ла егеттәребеҙҙең күберәк булыуы йөрәкте өтә...

Был айҙағы хәрби дан көндәре быының менән генә сикләнмәй әле. Рәсәй Ҡоралды Көстәренең бөгөн көнө-төнө илебеҙ күге хәүефһеҙлеген һаҡлап, сафта тороусы Зенит-ракета ғәскәрҙәре фиҙаҡәрлеген билдәләп, уларҙы хөрмәтләү көнө **8 июлгә** тәғәйенләнһә, **17 июлдә** Рәсәйҙең Хәрби-диңгеҙ флоты авиацияһы, ә **28 июлдә** - Хәрби-диңгеҙ флоты көнө икән. Был айҙағы хәрби темаға ҡарата тағы бер ҡыҙыҡлы дата бар: 1944 йылдың 17 июлендә әсиргә төшкән 57 600 немец һалдаты, офицеры һәм генералы һаҡ аҫтында Мәскәү урамдары аша үтеп киткән. Бөгөн НАТО-ның сәүектәренә әүерелеп, Рәсәйҙе ҡан дошманы күргән Литва менән Польша тап ошо айҙа совет ғәскәрҙәре тарафынан фашист ҡоллоғонан азат ителгән...

Был ай календарында тағы ла ошондай билдәле даталар бар: Бөтөн донъя Билдәһеҙ осоусы объект (НЛО) **(1)**, ЮХХДИ көндәре **(3)**, Башҡорт авиацияһының тыуған көнө; Диңгеҙ һәм йылға флоты эшселәре **(7)**, Аллергия менән бөтөн донъя көрәш; Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ **(8)**, Бөтөн донъялағы халыҡтар көнө **(11)**, Почта; Балыҡсы көндәре **(14)**, Этнограф көнө **(17)**, Бөтөн донъя шахмат **(20)**, Металлург **(21)**, Баҡсасы (дачник) **(23)**, Һыуға батыуҙарҙы иҫкәртеү **(25)**, Сауҙа **(27)**, PR-белгестәр; Гепатит менән бөтөн донъя көрәш **(28)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ; Кешеләр менән сауҙа итеүгә ҡаршы бөтөн донъя көрәш **(30)** көндәре.

**Июлдә тыуғандар:**

**11 -** күренекле йырсы, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының төп солисы, БР Башлығының мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса кәңәшсеһе, РФ Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәтселек советы ағзаһы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған,Башҡортостандың халыҡ артисы,Салауат Юлаев ордены кавалеры, Халыҡ-ара һәм Бөтөн Рәсәй конкурстары лауреаты **Аҫҡар Абдразаҡовҡа - 55 йәш** (1969).

**-** дәүләт эшмәкәре, БР Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары, полиция полковнигы, хәрби хәрәкәттәр ҡатнашсыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, Халыҡтар дуҫлығы һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры, Ауырғазы районының почетлы гражданы **Ирек Сәғитовҡа - 55 йәш** (1969).

**12 -** композитор, дирижер, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Гимны көйө авторы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Фәрит Иҙрисовҡа - 70 йәш** (1954).

**16 -** табип-офтальмолог, медицина фәндәре кандидаты, "РИА-Медоптик" офтальмология үҙәге директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Рәшит Искәндәровҡа - 65 йәш** (1959).

**29 -** техник фәндәр докторы, профессор, Башҡорт дәүләт аграр университетының ауыл хужалығы машиналары кафедраһы мөдире, Үҫемлекселек механизацияһы өлкәһендә ғилми мәктәп етәксеһе, БР Фәндәр академияһының ағза-мөхбире **Салауат Мөҙәрисовҡа - 55 йәш** (1969).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҡайтарыу хоҡуғын нығыта. Рәсәй Федерацияһы субъекттарына үҙ биләмәләрендә фонограммаларҙы ҡулланыу һәм ҡулланыусыларға мәғлүмәт еткереү тәртибен билдәләү хоҡуғы бирергә тәҡдим ителә.

Республика парламенты спикеры әйтеүенсә, бында бөтөнләй тыйыу тураһында һүҙ бармай. "Концертта заманса тауыш - ҡатмарлы система, - тине Константин Толкачев. - Сығышты сағыуыраҡ итеү өсөн етди студияларҙа эшкәртелгән композициянан айырым фрагменттар ҡулланылырға мөмкин. Әммә башҡарыусы "плюслы фонограмма" аҫтында сығыш яһаһа, тамашасыла һорау тыуасаҡ. Айырым осраҡтарҙа, мәҫәлән, концерт майҙансығының үҙенсәлектәренә, һауа шарттарына бәйле "плюс аҫтында" сығыш яһарға мөмкин, әммә сараны ойоштороусылар тамашасыға был хаҡта хәбәр итергә тейеш..."

Хәбәр ителеүенсә, закон проектын әҙерләр алдынан ижади коллективтар, мәҙәниәт министрлығы вәкилдәре, федераль парламент депутаттары, йәмәғәтселәр һәм эксперттар менән консультациялар үткәрелде.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# АЗИЯЛА ДҮРТ КӨН



**Үткән аҙнаның 23 июненә ҡарата Махсус хәрби операция барышындағы хәлдәр, Донецкмедиа.ру порталының дөйөм белешмәһендә белдерелеүенсә, дошман тарафынан асыҡтан-асыҡ эскалация, йәғни Рәсәй территорияһы йүнәлешендә хәрәкәттәрҙең көсәйеү күренештәре менән һүрәтләнде. Рәсәйҙең нефть эшкәртеү заводтарына, АЭС-тарға һөжүм итергә маташыуҙар күҙәтелде. Көнбайыш ебәргән ҡорал Белгородҡа ғына түгел, Ростов һәм хатта Курск өлкәләренә ҡаршы ла ҡулланыла башланы.**

РФ Оборона министрлығы үткәргән брифингта, Рәсәй Ҡоралды көстәре Украина Һауа көстәренең осоуға әҙерлек һәм техник составын юғары аныҡлыҡтағы ҡорал утына тотто, дошмандың сәпкә алынған бөтөн объекттары ла ҡыйратылды, тип хәбәр итте. Бынан тыш, беҙҙең ғәскәрҙәрҙең "Төньяҡ", "Көнбайыш", "Көньяҡ", "Үҙәк" , "Көнсығыш" хәрби төркөмдәре подразделениелары үҙҙәренең тактик хәлен яҡшыртыуға өлгәште һәм әүҙем һөжүм йүнәлештәрендә дошмандың тере көстәре һәм техникаһына ҙур зыян килтерҙе. Британияның UnHerd яңылыҡтар сайтына һылтанып, Новости Рәсәй мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсе Арис Руссиностың һүҙҙәрен килтерә: "Был йәйҙә Рәсәй һуғыш яланында уңышҡа өлгәшеүе һәм Киевты үҙенең шарттарына буйһондороуы бик ихтимал". Руссинос әйтеүенсә, бындай һынылышты көнбайыштың ҡайһы бер чиновниктары ла танырға мәжбүр, ләкин улар был хаҡта өндәшмәүҙе хуп күрә.

Әйткәндәй, үткән аҙнала РФ Президенты Владимир Путиндың Төньяҡ Корея менән Вьетнамда дүрт көн буйы сәфәрҙә йөрөүе былай ҙа көнбайыш менән Аҡ йорттоң нервыһын ныҡ ҡына "ҡытыҡланы", буғай. "Азияла - 4 көн. Вашингтондың асыуын ҡабартыу өсөн Рәсәй Президенты Владимир Путинға шул да етте. Путиндың был илдәрҙә әйткән берсә ҡыйыу, берсә әйтеп бөтөлмәгән фекерҙәре бөйөк державалар дәғүәләшеүе һәм хәүефһеҙлеге өлкәһендәге былай ҙа ауыр хәлде тағы ла ҡатмарлаштыра төштө", - тип яҙҙы The New York Times гәзите. АҠШ-тың Япониялағы илсеһе Рам Эмануэль белдереүенсә, Путин үҙенең Азияға сәфәре менән Рәсәйҙең Вашингтон ихтыярына буйһонмаусы дәүләттәрҙең "төп ойоштороусыһы" булыуын АҠШ-ҡа күрһәтергә ниәтләне. Рәсәйҙең Америкалағы илсеһе Анатолий Антонов фекеренсә, АҠШ-тың ҡылыҡтарына ҡарамаҫтан, Глобаль Көньяҡ илдәре барыбер ҙә Рәсәй тарафына тартыла.

Был сәфәрҙәр һөҙөмтәһе булараҡ, Владимир Путиндың Вьетнам президенты То Лам менән төрлө яҡлы стратегик хеҙмәттәшлекте артабан нығытыу хаҡында берлектәге белдереү ҡабул итеүҙәрен атарға кәрәк. Рәсәй Президентының иң мөһим белдереүҙәре Вьетнамдың баш ҡалаһы Ханойҙа журналистарҙың һорауҙарына яуаптар мәлендә яңғыраны. Унда сәфәр барышы һөҙөмтәләре генә түгел, башҡа бик күп темаларға иғтибар бүленде. Айырыуса Украина мәсьәләһенә - Харьков өлкәһендәге һуғыштар, Украина президенты Зеленскийҙың яҙмышы хаҡындағы һорауҙарға һәм, әлбиттә, донъяла бөгөнгө ядро көсөргәнешенә ҡарата фекерен белдерҙе В.Путин.

Ә унан алда, 19 июндә Путин Төньяҡ Корея етәксеһе Ким Чен Ын менән стратегик хеҙмәттәшлек хаҡында Килешеүгә ҡул ҡуйҙылар. "Бында бер ниндәй ҙә яңылыҡ юҡ, - тине Рәсәй Президенты, - ғәмәлдән сыҡҡан элекке килешеү, бер нәмәне лә тип әйтерлек үҙгәртмәйенсә, яңынан төҙөлдө һәм ҡул ҡуйылды..." Был документҡа ярашлы, Рәсәй менән ҠХДР ошо ике илдең береһенә ҡарата ситтән агрессия күрһәтелә ҡалған хәлдә, кисекмәҫтән үҙ-ара ярҙам ҡулы һуҙыу хаҡында килештеләр. Ошо уңайҙан Владимир Путин белдереүенсә, ҡул ҡуйылған был документтар башҡа илдәргә һис бер нисек тә янамай, шулай булғас, тине ул, әгәр күршеләренә ҡаршы яман уй тотмаһа, Көньяҡ Корея борсолмаһа ла була. "Ә, ғөмүмән, был региондағы хәүефһеҙлек мәсьәләһе хаҡында уйланырға кәрәк, юғиһә, бөгөн блок системаһы Азияла нығынырға итә. НАТО унда даими йәшәү урыны күреп "күсергә" йыйына хатта. Был, әлбиттә, Азияның күршеләге илдәре өсөн, шул иҫәптән, Рәсәйгә ҡарата ла хәүеф тыуҙыра", - тине В.Путин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Әбйәлил районында ҡойма ямғырҙан һуң Озерный ауылындағы 76 йорт ихатаһын һәм 2 шәхси йортто һыу баҫҡан. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, эвакуацияға мохтаждар юҡ, халыҡ ваҡытлыса йәшәү пунктына барыуҙан баш тартҡан. Һыу 70 сантиметрға күтәрелгән, ямғыр туҡтағандан һуң кире ҡайта башлаған. Был хәл - Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса баш идаралығы контролендә.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән 2030 йылға тиклем торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, сәнәғәт һәм башҡа ойошмаларға газ үткәреү төбәк программаһы раҫланды. Билдәләнгән маҡсатлы күрһәткестәр иҫәбендә - торлаҡ фондына газ үткәреү кимәлен 88 процентҡа еткереү, газ торбалары һуҙыу, автомобилдәргә газ тултырыу компрессор станцияларын 116-ға арттырыу (әле 51) һәм башҡалар.

✓Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар хәрби хәрәкәттәр ветераны танытмаһын ҡағыҙ бланкта ғына түгел, электрон формала ла алырға мөмкин. Был турала Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин белдерҙе. Уның билдәләүенсә, таныҡлыҡтың яңы формаһы электрон документ булып иҫәпләнә, банк һәм социаль карталар функцияһы берләштерелә, был иһә ветерандарға федераль һәм төбәк льготаларына хоҡуҡ бирә. Бынан тыш, айлыҡ түләүҙәрҙе ғаризаһыҙ тәғәйенләү тәртибе оҙайтылды. Бындай ярҙам алыу өсөн хәҙер махсус документтар йыйыу талап ителмәй.

✓Башҡортостанда алдағы ете йылда авария хәлендәге торлаҡтан күсереү буйынса яңы адреслы программа раҫланды. Мәсьәлә Хөкүмәт ултырышында тикшерелде. Республика Хөкүмәте Премьер-министры һүҙҙәренсә, Башҡортостан 2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем авария хәлендә тип танылған торлаҡтан күсереү республика программаһын ваҡытынан алда тамамланы, 213 күп фатирлы йорттан, йәғни 60 мең квадрат метрҙан ашыу авария хәлендәге торлаҡтан кешеләр күсерелде

✓Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан "Һөт иле" фестивален үткәреү көнөн хәбәр иттеләр. 21 һәм 22 сентябрҙә Өфөлә Дуҫлыҡ монументы янындағы Ағиҙел йылғаһы буйында байрам ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Һәр ваҡыттағыса, баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн төрлө саралар ойоштороla. "Һөт иле" ғаилә фестивале 2011 йылдан башлап уҙғарыла.

✓ *Күп кенә юғары уҡыу йорттарында БДИ һөҙөмтәләренә өҫтәмә 10 балл алыу мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, ГТО нормаларын тапшырған һәм юғары уҡыу йорто үткәргән олимпиадаларҙа ҡатнашҡан өсөн.*



ҠЫҪҠАСА

# ЙӘШТӘР БАЙРАМ ИТӘ

**Башҡортостан парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 29 июндә Йәштәр көнө билдәләнә, шуға бәйле республикала алкоголь һатыу тыйыла.** "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү, уларҙың әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында" законға ярашлы, Йәштәр көнөндә алкоголь продукцияһын һатырға рөхсәт ителмәй. 2022 йылға тиклем байрам 27 июндә үткәрелә ине, ләкин 2023 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путин уны үҙгәртергә ҡушты. Хәҙер Рәсәйҙә Йәштәр көнөн йәйҙең беренсе айының һуңғы шәмбеһендә билдәләйҙәр", - тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Тыйыу ресторан-кафеларға ҡағылмай. Улар ғәҙәттәгесә эшләй. Республикала Белем көнөндә лә хәмер һатмайҙар, быйыл ошо дата 2 сентябрҙә билдәләнә.

✓ **Хөкүмәт торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә субсидия биреү тәртибен ябайлаштырҙы.** Хәҙер ошондай субсидия алыу өсөн граждандарға дәүләт хеҙмәттәре порталындағы шәхси кабинет аша электрон ғариза ғына бирергә кәрәк. Документтарҙың төп өлөшөн дәүләт органдары ведомство-ара электрон үҙ-ара эш итеү системаһы аша һоратып алырға тейеш, тип хәбәр итә Рәсәй Министрҙар Кабинетының матбуғат хеҙмәте.Шулай уҡ граждандар ошо ярҙам сараһын тәғәйенләүҙе һорап социаль яҡлау органдарына йәки күп функциялы үҙәккә мөрәжәғәт итергә мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ай һайын килеменең билдәле бер өлөшөн торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә сарыф иткән граждандар субсидия алыу хоҡуғына эйә. Һәр төбәк был норманы үҙе билдәләй. Хәбәр ителеүенсә, 1 июлдән льготаһы булғандар коммуналь хеҙмәттәр өсөн комиссияһыҙ түләй ала.

✓ **Башҡортостанда балаларҙы йәйге һауыҡтырыу ойошмаларына 079/у белешмәһенең яңыртылған формаһы буйынса ҡабул итәләр.** Документ Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы бойороғо буйынса яңыртылды, тип белдерҙе һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. "Белешмәлә баланың оҙатып йөрөүсегә мохтаж булыуы, даими рәүештә дарыуҙар ҡабул итеүе, махсус туҡланыу, унайлы мөхит булдырыу хаҡында өҫтәмә мәғлүмәт бар", - тип асыҡлыҡ индерҙе министр. Лагерға инер алдынан балаларҙы беркетелгән урыны буйынса табип-педиатр ҡарай, тип иҫкә төшөрҙө ул. 079/у белешмәһе һауыҡтырыу ойошмаһына килергә өс көн ҡалғас бирелергә тейеш. Быйыл йәй балаларҙың сәләмәтлеген бөтәһе 133 табип һәм фельдшер, шулай уҡ 317 шәфҡәт туташы күҙәтә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙӘШ ПЕДАГОГТАРҒА...

**Радий Хәбиров мәктәпкәсә учреждениеларҙың йәш педагогтарына Башҡортостан Башлығы гранттарын тапшырҙы.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика етәксеһе уҙған йылдың авгусында 35 йәшкә тиклемге йәш тәрбиәселәргә, педагог-психологтарға, уҡытыусы-логопедтарға, уҡытыусы-дефектологтарға, музыка етәкселәренә, физик культура буйынса инструкторҙарға гранттар булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйғайны. Уларҙың күләме 500 мең һум тәшкил итә. "Һеҙ ғүмерегеҙҙе йәмғиәт, ил өсөн мөһим эшкә - кескәйҙәр хаҡында хәстәрлек күреүгә бағышлағанһығыҙ. Һеҙ баланың шәхесен формалаштыраһығыҙ. Ошо конкурста еңеү йәнә һеҙҙең үҙ һөнәрегеҙҙең оҫтаһы һәм һайлаған эшегеҙгә тоғро булыуығыҙҙы раҫланы. Һуңғы йылдарҙа республикаңың мәктәпкәсә белем биреү системаһы әүҙем үҫешә. Беҙ йыл һайын уртаса алғанда 10 яңы балалар баҡсаһы төҙөйбеҙ һәм асабыҙ. Был бик яҡшы күрһәткес. Уларҙы заманса ҡорамалдар һәм технологиялар менән йыһазландырыуҙа ярҙам итәбеҙ. Илдә Рәсәй Президенты тәҡдим иткән балалар баҡсаларын капиталь ремонтлау программаһының башланыуын түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ. Әле Башҡортостан заявка документтарын әҙерләй, программа мәктәпкәсә учреждениеларыбыҙҙы яңыртырға ярҙам итергә тейеш", - тине Радий Хәбиров.

Конкурсҡа 8 ҡаланан һәм 34 районДан 151 ғариза килгән. Конкурс йомғаҡтары буйынса 50 еңеүсе билдәләнде, шуларҙың 28-е - тәрбиәсе, дүртәүһе - өлкән тәрбиәсе, дүртәүһе - физик культура буйынса инструктор, 6-һы - музыкаль етәксе, өсәүһе - педагог-психолог, бишәүһе - уҡытыусы-логопед.

Республикала дәүләткә ҡарамаған балалар баҡсалары селтәре әүҙем үҫешә, улар муниципаль баҡсаларҙан бер ҙә ҡалышмай, тип билдәләне республика етәксеһе. "Демография" милли проекты сиктәрендә 2020 йылдан уларҙа 1 200-ҙән ашыу өҫтәмә урын булдырылған, ә йыл аҙағына тиклем тағы 360 урын барлыҡҡа килер тип көтөлә. Республикала "Мәктәпкәсә белем биреү сертификаты" проекты уңышлы тормошҡа ашырыла. Радий Хәбиров Мәғариф һәм фән министрлығына киләһе йылдан муниципаль ғына түгел, шәхси балалар баҡсалары өсөн дә гранттар конкурсын әҙерләргә ҡушты.

# БАШЛАНДЫ!

**20 июндә Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү кампанияһы башланды. Университеттарға документтарҙы 25 июлгә тиклем тапшырырға мөмкин. Уҡырға алыныу тураһында бойороҡтар 3-9 августа баҫылып сыға.**

Башҡортостандың Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл республика вуздарында 14,8 мең бюджет урыны асылған. Был республикалағы ун беренсе класты тамамлаусылар һанына тиң тиерлек. Документтар тапшырыуға килгәндә, йылдан-йыл төрлө мәғлүмәт ресурстары ярҙамында был процедура ябайлаштырыла. Абитуриенттар документтарын "Вузға онлайн уҡырға инеү" суперсервисы менән "Дәүләт хеҙмәттәре" аша тапшырырға мөмкин. Был айырыуса икенсе ҡалалағы университетка инергә йыйынған йәштәргә уңайлы. Бынан тыш, быйыл күп функциялы үҙәк аша документтар биреү мөмкинлеге бар. Шул уҡ ваҡытта ғаризаны шәхсән килеп, почта һәм юғары уҡыу йорттары сайттары аша тапшырырға мөмкин. Ғариза бюджет, шул иҫәптән маҡсатлы һәм түләүле, көндөҙгө, көндөҙгө-киске һәм ситтән тороп һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәренә, бакалавриат һәм белгеслек программаларына ҡабул ителә. Шулай уҡ быйыл абитуриенттар дәүләт хеҙмәттәре порталы ярҙамында эш бирүсе менән маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡыу килешеүен төҙөй ала.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, күп кенә юғары уҡыу йорттарында БДИ һөҙөмтәләренә өҫтәмә 10 балл алыу мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, ГТО нормаларын тапшырған һәм юғары уҡыу йорто үткәргән олимпиадаларҙа ҡатнашҡан өсөн. Шуға күрә портфолионы мәктәптә уҡыған ваҡытта уҡ туплай башларға кәрәк, сөнки бының өсөн уҡырға ингәндә өҫтәмә балдар бирелә.

# УҢЫШТАР ҠЫУАНДЫРА

**Ҡаҙанда БРИКС уйындарында сығыш яһаған Башҡортостан спортсылары еңеүгә ихтыяр көсөн күрһәтте һәм лайыҡлы һөҙөмтәләргә өлгәште. Улар 12 алтын, 7 көмөш һәм 1 бронза миҙал яуланы. Рәсәй йыйылма командаһы дөйөм зачётта беренсе урынды алды, тип билдәләне республика етәксеһе Радий Хәбиров.**

"БРИКС илдәре уйындарында 90 илдән 4,8 мең кеше ҡатнашты. Спортсыларыбыҙҙы, уларҙың тренерҙарын һәм яҡташтарыбыҙ өсөн янып-көйгәндәрҙең барыһын да ҡотлайым. Республикабыҙ йәнә илдең ҙур спорт үҙәге икәнен раҫланы. Ғорурланабыҙ!" - тип яҙа Радий Хәбиров үҙенең telegram-каналында. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, илдең йыйылма командаһы составына 18 яҡташыбыҙ инде. Бына улар: Азалия Әминева, Хажиәкбәр Мәмәйосопов һәм Бекхан Исраилов (бокс), Алина Дәүләтова (бадминтон), Артур Зөлҡәрнәев (көрәш), Нохчо Лабазанов (спорт көрәше), Алена Фәтихова, Алина Пухова, Замира Кусаева, Илфаҡ Ибәтуллин, Рәзил Шәбиев, Айнур Сыртаев (билбау көрәше), Тимур Сафин һәм Владислав Журавлёв (фехтование), Эрнест Шәрәфетдинов, Анна Кудрявцева, Айгөл Садиҡова (карате), Илья Первухин (байдаркала һәм каноэла ишеү).

# БУШЛАЙ ЙӨРӨЙҘӘР

**Башҡортостандың хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Ольга Кабанова Дәүләт Йыйылышында ҡануниәткә төҙәтмәләр проекты менән таныштырҙы.**

Төп яңылыҡ - күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән уҡыусылар өсөн йәмәғәт транспортының бөтә төрҙәрендә лә бушлай йөрөргә рөхсәт итеү (уҡыу йылы дауамында көнөнә ике тапҡыр). Шул уҡ ваҡытта аҙ тәьмин ителгән булыу иҫәпкә алынмай. Республикала бындай льготаны барлыҡ ишле ғаиләләргә лә бирергә ниәтләйҙәр. Хәҙер илдә күп балалылыҡ критерийы бер генә - өс бала, шул иҫәптән тәрбиәгә алынғандар. Льгота 2024 йылдың 1 сентябренән ғәмәлгә инер тип планлаштырыла. Бының өсөн республика ҡаҙнаһынан өҫтәмә аҡса талап ителә, тип билдәләне министр урынбаҫары.

- Киләһе уҡыу йылынан ҡала ерендә йәшәгән күп балалы ғаиләләрҙәге уҡыусылар уҡыған көндәрҙә ҡала йәмәғәт транспортында: автобуста, троллейбуста һәм трамвайҙа бушлай йөрөй ала. Сығым йөкләмәләрен республика үҙ өҫтөнә ала, - тип белдерҙе Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачёв. - Бынан тыш, ишле ғаиләләргә муниципаль һәм республика милкендәге музейҙарға, парктарға бушлай инеү мөмкинлеге бирергә тәҡдим ителә. Ошо льготаны тормошҡа ашырыу өсөн ғаиләләргә тейешле танытма алырға кәрәк.

"Күп бала тәрбиәләгән ғаиләләр дәүләттең уларға хөрмәт менән ҡарағанын тойорға тейеш", - тине Ольга Кабанова. Закон проекты киләһе пленар ултырышта тәүге уҡыуҙа ҡарауға сығарылды.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө мэры Ратмир Мәүлиев Грозный башлығы Хас-Магомед Ҡадиров менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Тантаналы сара Ҡаҙанда БРИКС+ илдәре ҡалалары ассоциацияһы йыйылышында үтте. "Төрлө өлкәләрҙә тәжрибә менән алмашырбыҙ, сауҙа-иҡтисади, инвестиция һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе камиллаштырырбыҙ, шулай уҡ яңы хеҙмәттәшлек формаларын үҫтерербеҙ", - тип яҙа баш ҡала хакимиәте етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Йәштәр көнөндә, Өфөлә Ағиҙел йылғаһы буйында Зәйнетдин, Inst Rinna, BABEKRISBABE, Lesha Mironov, Sunshine & Vostorg һәм VITA SAMURAI ҡатнашлығында байрам шоуы була. Шулай уҡ программала стендап, граффити-фестиваль, фиджитал турнир, бариста конкурсы, К-рор һәм косплей майҙансығы, балалар өсөн оҫталыҡ дәрестәре, бүләктәр уйнатыу ҡаралған. Киске сәғәт 5-тә башлана. Инеү иректә. 6+

✓Өфө ҡала хакимиәтендә Салауат Юлаев проспектындағы юл күперҙәрен яҡтыртҡыстар менән матурлау эштәре тураһында һөйләнеләр. Әлеге көндә өс юл сиселеше түбәндәге төҫтәрҙә биҙәлгән: З. Вәлиди урамына менгән урында - күк, Октябрь революцияһына - йәшел, Галле ҡалаһы урамына - фирүҙә төҫө. Шулай уҡ быйылғы йәйҙә СССР-ҙың 50 йыллығы урамына илткән юл сиселешен ҡыҙыл, Минһажев урамына һарғылт-бал, Киров урамына сыҡ йәшел төҫтәге яҡтыртҡыстар ҡуйыласаҡ. Революцион һәм Әй урамдары буйлап юл күперенә яҡтыртҡыстар әлеге ваҡытта эшләнә башлаған.

✓Өфөнөң Инорс биҫтәһендә һыуҙа бәхетһеҙлек осрағы теркәлгән. Баш ҡаланың граждандарҙы яҡлау идаралығы хәбәр итеүенсә, бер төркөм үҫмерҙәр Ҡариҙелгә һыу инергә килгән. Малайҙарҙың береһе бетон стенанан йылғаға һикергән һәм тәрәнгәрәк ингән. Уны шунда уҡ ағым ағыҙып алып киткән. Әйткәндәй, фажиғә булған урында һыу инеүҙе тыйған ике аншлаг ҡуйылған. Һыу инеү миҙгеле башланғандан алып республикабыҙҙа 25 кеше һыуға батҡан. 1 июндән 21 ир-егет, өс ҡатын-ҡыҙ һәм бер үҫмерҙең кәүҙәһен һыуҙан сығарғандар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Үткән шәмбелә баш ҡалабыҙға ябырылған көслө ҡойон һәм дауыллы ел арҡаһында 106 ағас ауған, 23 автомобиль зыян күргән, 5 электр линияһы бағанаһы йыҡылыуы теркәлгән...*



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# КӨРӘШ ҺАРАЙЫ БУЛАСАҠ!



**Өфө ҡалаһы буйынса эшлекле сәфәрендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров күп функциялы Көрәш һарайы төҙөлөшө барышы менән танышты.**

Был республика баш ҡалаһының 450 йыллығына ҡарата төҙөлгән төп юбилей объекттарының береһе булып тора. Спорт объекты Өфө ҡалаһының Октябрь районында, Муса Гәрәев, Архитектор Рехмуков, Рудольф Нуриев һәм Комсомол урамдары менән сикләнгән кварталда төҙөлә. Объекттың дөйөм майҙаны - 28 мең кв. м. Бында спорт комплексы һәм спорт көрәше мәктәбе, 3400 тамашасыға иҫәпләнгән трибуналы универсаль зал, спортсмендар өсөн ҡунаҡхана, конференц-зал, медицина-тергеҙеү үҙәге һәм башҡа ярҙамсы бүлмәләр, шулай уҡ спа-комплекс һәм бассейн буласаҡ. Ошо спорт учреждениеһында көс көрәше һәм башҡа спорт төрҙәре буйынса халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәлендәге ярыштар уҙғарыласаҡ. Подряд ойошмаһы етәксеһе Дмитрий Дудко эшселәрҙең объектта тәүлек әйләнәһенә ике сменала эшләүе хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Төҙөлөш эштәре тамамланыуға бара. Шулай уҡ эргәләге территорияны төҙөкләндереү һәм ағастар ултыртыу дауам итә, һөҙөмтәлә бында ял итеү өсөн йәмәғәт арауығы, урамдағы волейбол, баскетбол майҙансыҡтары, футбол яланы хасил буласаҡ. Төҙөүселәр 57 колонналы мәрмәр менән тышлауҙы тамамланы, уларҙың бейеклеге - 16,5 метр. Уларҙың береһенә Рәсәй Президенты Владимира Путиндың " Көрәш - бик сағыу, күңелде биләп алырлыҡ спорт төрө" тигән һүҙҙәре, икенсеһенә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың "Ныҡышмал булһаң - хыялдар тормошҡа аша!" тигән цитатаһы ташҡа уйылып яҙылған.

Төбәк етәксеһе алда торған "Рәсәй - спорт державаһы" тигән халыҡ-ара форумға әҙерлек барышы буйынса фекер алышыу ойошторҙо. Тап Көрәш һарайында илебеҙҙең спорт форумының төп саралары уҙғарыласаҡ.

- "Рәсәй - спорт державаһы" форумы - Президент форматы ул. Бында спорт һәм физик культура буйынса Совет уҙғарылыр тип уйлайбыҙ, уны Президент үҙе алып бара. Әлбиттә, беҙ юғары ҡунаҡтар десантын һәм иң элек Президенттың килеүен көтәбеҙ. Көрәш һарайын беҙ 31 августа, Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейын байрам иткән көндә асасаҡбыҙ. Бында ҙур спорт байрамы үтәсәк. Был бер үк ваҡытта мәҙәниәт һәм ял итеү үҙәге буласаҡ. Йөҙәрләгән егет-ҡыҙҙар төрлө спорт төрҙәре менән шөғөлләнәсәк. Бындай объектты ҡарау ауырға төшәсәк, шуға күрә бер аҙ килем алыу маҡсатында концерттар уҙғарыу күҙаллана. Бында 4 меңгә яҡын тамашасы урыны буласаҡ. Барыһын да сифатлы эшләйбеҙ. Яҡшы объект, уның архитектураһы үҙенән-үҙе игтибарҙы йәлеп итеп тора", - тине Радий Хәбиров.

# ҠОЙОН ЭҘЕМТӘЛӘРЕ



**Үткән шәмбелә баш ҡалабыҙға ябырылған көслө ҡойон һәм дауыллы ел арҡаһында 106 ағас ауған, 23 автомобиль зыян күргән, 5 электр линияһы бағанаһы (ЛЭП) йыҡылыуы теркәлгән, 3 урында торлаҡ йорттарҙың ҡыйыҡтары емерелгән, 7 мәртәбә авария һөҙөмтәһендә электр уты һүнгән, 21 тапҡыр тышҡы яҡтыртыу саралары эшләүҙән туҡтаған. Ашығыс хеҙмәттәргә ҡала кешеләре 250 тапҡыр мөрәжәғәт иткән, - тип мәғлүмәт бирҙе Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.**

- Әлеге көнгә авария арҡаһында килеп сыҡҡан барса һүндереүҙәр буйынса эш тамамланды, электр менән тәьмин итеү тергеҙелде, коммуналь хеҙмәттәр йығылған ағастарҙы бысыуҙы һәм алып китеүҙе дауам итә. Урамдарыбыҙҙы тәртипкә килтерәбеҙ. Коммуналь хеҙмәттәр оператив эшләне, барыһына лә рәхмәт һүҙҙәре белдергем килә, - тине ул.

- Был стихия, уның ҡасан һәм нисек булырын беҙ белә алмайбыҙ. Аллаһҡа шөкөр, бер кем дә һәләк булманы. Хәҙер ошо хәлдең эҙемтәләрен максималь рәүештә бөтөрөү идара итеү оҫталығынан тора. Берике көн эсендә бөтөн йығылған ағастарҙы йыйып алырға, урамдарҙы тәртипкә килтерергә кәрәк, бына тағы юл буйҙарында сүп-сар йыйылды, сөнки барса бысраҡ йыуылып төштө. Был муниципалитет эше, - тип мөрәжәғәт итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров район һәм ҡала башлыҡтарына.

ҠАЙҒЫЛЫ ХӘБӘР

# БӨЙӨК ШӘХЕС ИНЕ



**24 июндә Өфө ҡалаһында күренекле башҡорт ғалимы һәм яҙыусыһы Рәшит Шәкүрҙе һуңғы юлға оҙаттылар. Ул оҙайлы ауырыуҙан һуң 88-се йәше менән барғанда баҡыйлыҡҡа күсте. Башҡорт дәүләт филармонияһына мәрхүм менән хушлашырға бик күп йәмәғәтселек вәкилдәре килде.**

Рәшит Закир улы Шәкүров - Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре, Өфө ҡалаһының һәм Стәрлетамаҡ районының почетлы гражданы. Ул Башҡортостанда бик һирәк күренеш булған ғалим-энциклопедист булараҡ танылыу тапты, уны башҡорт әҙәбиәтенең аҡһаҡалы тип атанылар. Рәшит Шәкүр республика әҙәбиәте һәм фәне үҫешенә ҙур өлөш индерҙе.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең хушлашыу һүҙендә Рәшит Шәкүрҙең үҙ замандаштары өсөн әхлаҡи өлгө булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм уның яҡындарының ҡайғыһын уртаҡлашты. "Бөгөн республикабыҙ ысынлап та бик ҙур, ауыр юғалтыу кисерә. Рәшит Закир улы - юғары кимәлдәге классик белемле бөйөк ғалим. Һәм, әлбиттә, уның башҡорт телен, башҡорт филологияһын үҫтереүгә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Ул бөйөк башҡорттарҙың биографияларынан башлап, ижади әҫәрҙәренә тиклем күп яҡлы ижади мираҫ ҡалдырҙы. Иң мөһиме - ул Башҡортостандың ысын ватансыһы ине. Ул, үҙ принциптары, идеялары, идеалдары булған шәхес булараҡ, үҙенең барса ғүмерен Башҡортостанды, башҡорт халҡын үҫтереүгә арнаны. Һәм, әлбиттә, эштәре, фекерҙәре, позицияһы башҡаларға өлгө булған шәхес булараҡ, беҙ барыбыҙ ҙа уның яныбыҙҙа булмауын ауыр кисерәбеҙ. Мин уның туғандарына һәм яҡындарына тәрән ҡайғы уртаҡлашыуымды белдерәм. Тыныс йоҡлағыҙ, хөрмәтле Рәшит Закир улы. Бәхил булығыҙ, хөрмәтле Рәшит ағай!" - тине Радий Хәбиров һәм Рәшит Закир улының хәтерен мәңгеләштереү өсөн тейешле булған барса ҡарарҙар ҡабул ителәсәк, тип вәғәҙәләне.

Матәм митингыһын БР Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов алып барҙы, ул мәрхүм биографияһының, ижади һәм йәмәғәт эшмәкәрлегенең иң мөһим мәлдәрен билдәләне. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова Рәшит Закир улының йәмәғәт эшмәкәрлегенең әһәмиәтен билдәләне һәм уның һуңғы әҫәрҙәренең береһе республика етәксеһе грантына баҫырға әҙерләнеүе хаҡында белдерҙе. Ижад буйынса коллегаһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Кәҙим Аралбай Рәшит Шәкүрҙең республика әҙәбиәте тарихына Мифтахетдин Аҡмулла исемен ҡайтарыуға күп көс һалыуын билдәләне, ысын рухи ҡомартҡылар - башҡорт энциклопедияһын һәм алты томлы башҡорт әҙәбиәте тарихын сығарыуҙа Рәшит Закир улының башлап йөрөү-се булыуынайырып әйтте. Рәшит Закир улы Өфө ҡалаһының Мосолман зыяратында ерләнде.

**(Бәхилләшеү һүҙен 12-13-сө биттәрҙә уҡығыҙ).**

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡара көртмәле

Ҡара көртмәле май-июндә берәмтекле, йәшкелт аҡ сәскә ата. Емештәре июль-августа өлгөрә. Был бик файҙалы емеш һәм борондан халыҡ дауаһында ҡулланыла. Ҡара көртмәләлә калий, көкөрт, кальций, тимер, марганец, баҡыр, бор, хром кеүек микроэлементтар бар. Унда ҡанда шәкәр күләмен кәметеүсе ниомиртиллин, ҡандың ойошоусанлығын кәметеүсе оксикумаринда кеүек биологик әүҙем матдәләр ҙә табылған. Дауаланыу өсөн июль-августа емешен һәм май-июндә япрағын йыялар. Ҡара көртмәле эсәк-ашҡаҙан юлы эшмәкәрлеген көйләй, матдәләр алмашыныуын шәбәйтә, курыштырғыс, бәүел ҡыуҙырғыс, ауыртыныуҙы баҫҡан, елһенеүгә ҡаршы, ҡанды туҡтатыусы йоғонто яһай. Емеше күҙҙең күреү һәләтен яҡшырта. Япрағы ҡанда шәкәр кимәлен түбәнәйтә.

❖ Аҡ ҡанлылыҡ (лейкоз) булғанда 6 ҡалаҡ ҡара көртмәле япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. 1 ай дауамында көнөнә 5-6 стакан эсергә. Шунан 10 көн туҡталып торорға һәм ҡабатларға.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә 4 балғалаҡ киптерелгән ҡара көртмәле емешенә 1 стакан һыу ҡойорға һәм 8 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәне бер тәүлектә эсеп бөтөргә.

❖ Конъюнктивит булғанда көн һайын 1 ҡалаҡ ҡара көртмәле ашарға.

❖ Бәүел ташы ауырыуы, шәкәр диабетынан 2 балғалаҡ киптерелгән ҡара көртмәле япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/2 стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ яңы ҡара көртмәлегә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 15-20 минут ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә. Бәүел тотмағанда көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә. Шулай уҡ көн һайын 100-әр грамм емеште ашарға.

❖ Ашҡаҙан яман шешенән ҡара көртмәле япрағы төнәтмәһен 1:5 нисбәттә һыу ҡушып әҙерләргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Балапан ыласын
(Балобан)



Ыласындар төркөмөнә ҡараған эре йыртҡыс ҡоштарҙың береһе. Ата ҡоштоң кәүҙә оҙонлоғо - 47, инә ҡоштоҡо - 55 см-ға етә. Кәүҙәһенең өҫкө өлөшө көрән төҫтә, ҡанатында тутыҡҡан ерән йәки ҡара таптары бар. Суҡышы күкһел, тырнаҡтары ҡара, күҙҙәре эргәһендәге тиреһе һәм тәпәйҙәре - һары.

Башҡортостанда йәйге осорҙа ғына осрай, һирәк оя ҡора. 1983-1997 йылдарҙа Һаҡмар йылғаһының ҡушылдығы Йылайыр йылғаһынан юғарыраҡ үҙәнендә, "Шайтантау" ҡурсаулығында, Ирәндек тауында, Яҡтыгүлдә, Хәйбулла районында ояларын күреүселәр бар ине. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән.

Балапан ыласын башлыса Көнсығыш Европаның далалы һәм урманлы зоналарында йәшәй. Ҡара урманды үҙ итмәй, һунар инеү урыны ла асыҡ ерҙәрҙә һәм көндөҙ генә. Осоп барған ваҡ һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡоштарҙы тота, шулай уҡ осоп барышлай ерҙәге ваҡ йәнлектәрҙе лә тырнағына эләктерә. Ҡор, һоро өйрәк, һайыҫҡан, турғай, ҡаҙҙарҙы ашай. Йәнлектәрҙән йомран, терпе, йәш ҡуян, алйырҙан, ялман, ҡыр сысҡандарын һайлай.

1 йәшлек ҡош үҙенә пар һайлай һәм уның менән оҙаҡҡаса бергә ҡала. Ҡарға, селәң кеүек ҡоштарҙың ояһын һайлай һәм уларҙы бер нисә йыл буйына тотона. Ағаста ғына түгел, ҡаяла ла, йырындарҙа ла ояһы булыуы ихтимал. Инә ҡош мартта уҡ 3-5 йомортҡа һала, 28 көн баҫа. Был осорҙа уны туҡландырыу ата ҡоштоң иңенә ята. Бәпкәләр сыҡмаҫ элек ҡоштар үҙҙәрен тыныс тота, әммә аҙаҡтан һөҫелен һаҡлау өсөн ярһыу йыртҡысҡа әүерелә, кеше-фәлән күренеү менән ояһы тирәләй оса башлай. Ай ярымдан бәпкәләр ҡанат ныҡыта.

Борон балапан ыласынды башҡорттар ҡулға өйрәтеп, уның менән һунарға йөрөгән. Хәҙерге мәлдә был ҡош айырыуса һаҡлауға мохтаж.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ИРТӘГӘБЕҘ УЙЛАНДЫРА...

**Эшемә бәйле республика буйынса йөрөгәнемдә уҡытыусылар менән даими аралашам. Тәү сиратта уларҙың туған телебеҙгә бәйле фекерҙәре ҡыҙыҡһындыра мине. Күптән түгел Күмертау ҡалаһына юл төштө. Мөхәммәт Исҡужин исемендәге Башҡорт гимназияһында тиҫтә йылдан ашыу башҡорт теле, әҙәбиәтен уҡытҡан Ә.С. Түләгәнова менән осраштым. Халҡына ихлас бирелгән, уның иртәгәһе тураһында борсолоп уйланған шәхес итеп күрҙем Әнисә Сәғит ҡыҙын. Уның менән булған әңгәмә, моғайын, гәзит уҡыусыларҙы ла битараф ҡалдырмаҫ.**

- Һәр дәүерҙең, һәр замандың үҙенә генә хас проблемалары етерлек. Тәжрибә күрһәтеүенсә, улар үҙ мәлендә хәл ителмәһә, киләсәктә тағы ла ҙурыраҡ, тағы ла ҡатмарлыраҡ булып алға баҫыусан. Бөгөн иң етди мәсьәләләрҙең береһе - тыуымдың ҡырҡа кәмеүе. Һәм ул беҙҙең республикаға ғына хас түгел, ә бөтә илгә, шулай уҡ Европа илдәренә килгән афәт. Милләт һаҡланырмы, киләсәгебеҙ бармы, ул ниндәй булыр, ауылдарыбыҙ, ҡалаларыбыҙ бушап ҡалмаҫмы - был проблемалар бит туранан-тура тыуымдың артыу-артмауы менән бәйле.



Күмертау ҡалаһында башҡорт башланғыс мәктәбен асып, 10 йыл инде был мәктәптә етәксе булып эшләйем. Мәктәпте асҡан ваҡытта проблемалар икенсе ине: уҡытыуҙың сифатын күтәреп, уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙә уҡыған башҡорт балаларын үҙебеҙҙең мәктәпкә йәлеп итеү һ.б. Аллаға шөкөр, ул ваҡытта билдәләнгән маҡсаттарға ирешә алдыҡ, мәктәптә балалар һаны өс тапҡырға тиерлек артты, уҡытыу-тәрбиәнең дә сифаты бермә-бер яҡшырҙы. Бөгөн Мөхәмәт Исҡужин исемендәге прогимназия ике корпус биләй (мәктәп эргәһендә балалар баҡсаһы бар). Республика кимәлендә үткәрелгән "Исҡужин уҡыуҙары" фәнни-ғәмәли конференцияһын ойоштороуға өлгәштек. Бик матур ғаиләләрҙән балалар килә, улар яҡшы уҡып ҡына ҡалмай, төрлө ярыштарҙа, олимпиадаларҙа, конференцияларҙа ҡатнашып, мәктәптең данын күтәрә.

Быға тиклем йыл һайын кәм тигәндә беренсе синыфҡа еңел генә ике класс йыя инек. Ә бына быйыл бер класс йыя алабыҙмы, юҡмы? Күмертау ҡалаһында беренсе класҡа килеүселәр һаны 2023 йыл менән сағыштырғанда 300 балаға аҙайған. Тимәк, һәр класта 25 бала тип иҫәпләгәндә, яңы уҡыу йылында кластар һаны 10-12-гә кәмерәк буласаҡ. Күмертау ҡалаһында 12 мәктәп, һәр береһе кәм тигәндә берәр класс та йыйып ала алмаясаҡ, тигән һүҙ.

Нисек хәл итергә был проблеманы? Эйе, тыуым кәмей. Был йүнәлештә дәүләт кимәлендә төрлө саралар күрелә. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ыңғай һөҙөмтәләр булған хәлдә лә тиҙ арала һиҙелмәйәсәк әле.

Бөгөн иһә ниҙәр эшләргә мөмкин һуң? Күп кенә башҡорт булған ата-әсәләр балаһын эргәләге урыҫ телле балалар баҡсаһына йәки мәктәбенә бирә лә ҡуя. Ни өсөн? Сөнки мәшәҡәте әҙ. Юлдың иң еңелен һайлайбыҙ Ә баланың, сит мөхиттә тәрбиәләнеп, ҡандан бирелгән үҙ булмышынан айырылыуы, икенсе кешегә әйләнеүе хаҡында уйлап та бирмәйбеҙ. Тормошта бер генә нәмә лә еңел генә бирелмәй. Еңел бирелгәндең ҡәҙере булмауы ла яҡшы билдәле. Тимәк, ата-әсәләр менән ныҡышмалы рәүештә аңлатыу эше алып барыу мотлаҡ. Үҙ милли мөхитендә белем алған, халҡыбыҙ традициялары нигеҙендә тәрбиәләнгән балалар тормошта үҙ урынын тиҙерәк таба, уңыштарға ирешә, тормошонан ҡәнәғәтлек кисерә. Баланың киләсәген балалар баҡсаһынан уҡ ҡайғыртыу бик мөһим. Ҡалабыҙҙа башҡорт телендә белем һәм тәрбиә биргән ике балалар баҡсаһы бар. Балалар баҡсаһы - шишмәнең башы тип аңлар кәрәк. Үҙебеҙҙең ерлектә, туған тел мөхитендә тәрбиәләнгәндәр, артабан да ошо юлдан яҙлыҡмай, милли рухты үҙенең балаларына еткерә алғанда ғына беҙ халыҡ булараҡ һаҡланып ҡаласаҡбыҙ. Һәр үҫмер ата-әсәһенең балаһы ғына түгел, халҡының улыҡыҙы булып, үҙен генә түгел, халҡының киләсәген уйлап эш итһен ине.

Ишле башҡорт ғаиләләрен өлгө итеп күтәрәйек, күп балалы йорт - девизға әйләнһен. Ҡыҙҙарға өндәшкем килә: ҡатын-ҡыҙҙың төп миссияһы - бала табыу, бала бағыу. Шуның өсөн һаулығыбыҙҙы йәштән һаҡлағыҙ. Мода артынан ҡыуып, ярым яланғас йөрөүҙең һөҙөмтәләре бик хәүефле: күптәр бөгөн теләһә лә балаға уҙа алмай. Ҡатын-ҡыҙ өсөн был - оло трагедия! Төптән уйлаһаң, һаулыҡ һинең байлығың ғына түгел. Ул - ил байлығы. Тәнебеҙ сәләмәт булһа, рухыбыҙ ныҡлы булыр. Ә рухлы милләт замана проблемаларын, һис шикһеҙ, хәл итәсәк.

**Рәйсә КҮЗБӘКОВА яҙып алды.**

ПСИХОЛОГ КӘҢӘШЕ

# КӨЛӨГӨҘ,
## файҙаһы бар - белегеҙ!



**Донъялыкта йылмайыу һәм көлөү һәләте тик әҙәми заттарға ғына бирелгән. Донъяға килеп, күп тә үтмәй, бала ата-әсәһенең яғымлы ҡарашына, йылмайып бағыуына үҙе лә йылмайып яуап бирә башлай. Ваҡыты еткәс, баланың ихлас итеп, кеткелдәп көлөүе үҙе үк өйҙәребеҙҙең бер йәменә әйләнә. Бер тикшеренеүҙә иртәнән кискә тиклем балаларҙың көлөүен яҙҙырып алғандар: баҡтиһәң, улар көнөнә 400 тапҡыр көлә ала икән. Ә ололар? Иң күбендә - 15 тапҡыр.**

Кешеләр йәшәйештә тәбиғи рәүештә йылмая һәм көлә: быны өсөн сәбәптәр етерлек. Йәнәшәбеҙҙәге кешеләрҙе ике төркөмгә бүлергә мөмкин - йылмайып-көлөп йәшәргә яратыусылар (юмористар) һәм етдилек, хатта ҡараңғы сырайлылыҡ йөҙҙәренән һис бер китмәгәндәр. Түгеләре тирә-яҡтағыларға нур сәсеп, үҙҙәренә тартып торған кеүек булһа, икенселәре янында кешеләр оҙаҡ тора алмай.

Йылмайыу, көлөү кешенең йәненә лә, тәненә лә файҙалы. Көлгән саҡта кешене ыңғай эмоциональ кисерештәр биләп ала, күңеле күтәрелә, негатив уйҙары онотола, ул донъяны йәмлерәк, күркәмерәк итеп тоя башлай. Уның организмы башҡа саҡта булмаған физиологик халәткә инә: йөҙ-ҡиәфәте тик көлгән саҡта ғына була торған форма ала (күҙҙәре йылтырай, ауыҙы йырыла), тын алышы үҙгәрә, өҙөк-өҙөк тауыштар сығара, күкрәге гәҙәти булмағанса һелкенеп ала. Ныҡ көлгәндә күҙҙәренән йәш сыға, хатта эсе ҡатып китә. Ошо халәтте дауалау (терапия) сараһы итеп ҡабул итергә мөмкин.

Көлөү терапияһы менән ғалимдар һәм психотерапевтар уҙған быуаттың 60-сы йылдарынан бирле шөғөлләнә, хәҙер "Юморҙы өйрәнеү буйынса халыҡ-ара йәмғиәт", "Ғәмәли һәм терапия юморы ассоциацияһы" тигән ойошмалар бар. Күп илдәрҙә көлөү тренингтары уҙғарыла, сөнки күмәкләп көлөү күпкә файҙалыраҡ икән. Хәҙер көлкө терапияһы ауыр сирле балаларҙы дауалағанда бик һөҙөмтәле фактор сифатында танылыу тапты: дауаханаларҙа аниматорҙар, клоундар сығыш яһағандан һуң балаларҙың организмында ыңғай үҙгәрештәр булыуы рәсми теркәлгән.

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә көлөүҙең шифалы һөҙөмтәләре асыҡланған:

- тән ауыртыуын кәметеүгә килтерә;
- организмда стресс гормоны булған кортизол, шулай уҡ адреналин бүленеп сығыуын тотҡарлай;
- артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары барлыҡҡа килеү мөмкинлеген кәметә;
- организмдағы эндорфиндар кимәлен арттыра;
- диафрагма, эс, ҡулбаш мускулдарын әүҙемләштерә, шулай уҡ йөрәк тибешенә ыңғай тәьҫир итә;
- 10-15 минут дауамында 2 - 10 калорияны яндырыуға алып килә;
- организм кислород менән күберәк һәм тиҙерәк тәьмин ителә, һөҙөмтәлә мейе эшмәкәрлеге яҡшыра.

Ғөмүмән, йылмайып-көлөп йәшәргә әүәҫ булған кешеләр үҙҙәрен бәхетлерәк тоя. Шуға күрә психологтарҙың бик ҡыҙыҡлы бер тәҡдимен үтәргә өйрәнергә кәрәктер, тим. Уларҙың кәңәше ошондай: иртән йоҡонан уяныу менән, көҙгө алдына баҫып, үҙеңә йылмайып ҡарап алып, бына тағы яңы көн тыуҙы, барыһы ла бик яҡшы буласаҡ тип, эстән генә түгел, ә үҙең ишетерлек итеп әйтергә кәрәк. Йылмайыу - көлөүҙең тынысыраҡ, йомшағыраҡ бер прелюдияһы икәнен онотмау зарур. Үҙегеҙ ҙә башҡаларға йылмайыбыраҡ бағығыҙ, йышыраҡ көлөгөҙ һәм көлдөрөгөҙ, йәмәғәт.

✓ *Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр.*



*БОРОН-БОРОН...*

**Һәр халыҡтың үҙ тарихы булып, һәр ҡайһыһы яҙмышына яҙғанын кисерә, һәм уларҙың береһенең дә тарих боролмаларында юғалып ҡалғыһы килмәй. Милләт яҙмышы өсөн тарих һабаҡтарынан да баһалыраҡ башҡа ҡиммәттәр юҡтыр. Тап шуның өсөн дә боронғо башҡорттар һәм башҡорт иле тураһындағы яҙма мәғлүмәттәр ҙур тарихи әһәмиәткә эйә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хатта уларҙың донъя фәнендә билдәле булғандарын да беҙ тейешенсә өйрәнеп бөтә алғаныбыҙ юҡ әле. Мәҫәлән, XII быуатта Сицилияның норман короле Рожер II һарайында йәшәгән ғәрәп географы әл Иҙриси ул замандағы халыҡтар, уларҙың илдәре тураһында киң һәм бай мәғлүмәт туплап, "Донъя гиҙеүҙе хушһынғанға йыуаныс" исемле энциклопедик характерҙағы ҙур хеҙмәт яҙа. Был китапта боронғо башҡорттар тураһында ла шаҡтай ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирелгән. Беҙҙең өсөн бына нимә мөһим: бынан 850 йыл элек һәм унан да әүәлерәк башҡорт халҡы Европала үҙ иле (территорияһы), хужалығы, ғәскәре, ҡалалары, үҙенсәлекле теле булған үҙаллы халыҡ рәүешендә билдәле була. Мәскәү тарихсыһы Ирина Коновалованың "Әл Иҙриси Көнсығыш Европа илдәре һәм халыҡтары тураһында" тигән ҙур ғилми хеҙмәтенән ошо ғәрәп географының башҡорт иленә арналған яҙмаларын һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

# ӘЛ ИҘРИСИ БАСДЖИРТТАРЫ,

## йәғни XII быуатта Европаға билдәле Башҡорт иле тураһында





### VI климат, 7-се секция

Алтынсы климаттың етенсе секцияһында Хазар диңгеҙенең бер өлөшө, эске һәм тышҡы басджирт (Башҡорт. - **Ред.**) илдәренең территорияһы һәм уларға төньяҡтан сиктәш булған Аскутийа (Скифия. - **Ред.**) иле ерҙәре тураһында бәйән ителә. Алла ярҙамы менән беҙгә тиклем яҙылған китаптарҙан ошо илдәрҙең ябай һәм билдәле кешеләре тураһында өйрәнеп белдек. Әйтергә кәрәк, беҙ күрһәткән ерҙәрҙең ҙур өлөшө йыраҡтарға һуҙылған сүлдәрҙән һәм бер кеше лә йәшәмәгән арауыҡтарҙан тора. Торлаҡтары аҙ һанлы, бер-береһенән алыҫ, ярлы, ундағы халыҡтарҙың бер-береһе менән дошманлығы һәм юлдарҙың насар булыуы сәйәхәт итеү өсөн хәүефле.

Эске басджирттар иле һәм уның сиктәре тураһында беҙ бишенсе климаттың етенсе секцияһында һөйләгәйнек. Ә тышҡы басджирттар иленә килгәндә, уға Ҡаруҡийа, Нәмджан һәм Гүрхан ҡалалары ҡарай. Был ҡалаларҙа йәшәүселәр, үҙҙәренә етерлек кимәлдә сауҙа һәм һөнәрселек менән шөғөлләнеп, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Был халыҡтар бүтәндәрҙең биләмәләренә баҫып инеп, уларҙың мөлкәтен үҙенә ала. Был илдәр уңдырышлы, мул үҫемлекле һәм мал көтөүҙәре күп.

Басджирттар булғарҙар аръяғында гуз (Уғыҙ. - **Ред.**) иле сиктәренә яҡын йәшәүсе ике ҡәбиләгә бүленә. Уларҙың ғәскәрендә ике мең тирәһе яугир бар. Урман араларына инеп боҫһа, уларҙы сиктәш йәшәгәндәрҙең береһе лә таба алмай. Улар булғарҙарға буйһона. Улар тәүәккәл һәм көслөләр. Басджирт халҡы бәджнәктәргә (Бәшнәктәргә. - **Ред.**) сиктәш. Басджирттар һәм бәджнәктәр - Румға сиктәш төркиҙәр. Күп ваҡытта улар тыныс йәшәй, әммә ҡай саҡта бер-береһенә һөжүм итә, һәм уларҙың сауҙа итешеүе һуғышыу менән сиратлашып килә. Булғарҙарҙан рустарҙың алғы сиктәренә тиклем ун күсем араһы.

Басджирт ерҙәре Һаҫыҡ ергә (Себер һаҙлыҡтары, буғай. - **Ред.**) тиклем йәйрәп ята, ул турала беҙ Алла мәрхәмәте менән алдараҡ, алтынсы климаттың һигеҙенсе секцияһында һөйләрбеҙ. Тышҡы басджирт ере көнсығышҡа табан шулай уҡ Һаҫыҡ ергә тиклем етә.

Шулай уҡ тышҡы басджирттарҙан көнсығышҡа Нәмджан ҡалаһына тиклем һигеҙ күсем араһы. Нәмджан ҡалаһы - ҙур булмаған сәскә атыусы ҡаласыҡ. Уның менән төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә. Был ҡала Суҡан тип аталған йылға буйында урынлашҡан. Был ҡаланан көнсығышта Арджика тауында баҡыр рудниктары бар, унда меңдән ашыу кеше эшләй. Унда баҡыр күп табылып, Хуваразм (Хорезм. - **Ред.**) еренә, Шаш (Ташкент. - **Ред.**) иленә һәм гуз иленең яҡын өлкәләренә алып барыла. Был ҡаланан шулай уҡ төлкө һәм әл бабр (Ҡондоҙ. - **Ред.**) тигән йәнлек тиреләре сығарыла, улар йылға буйлап Хазар диңгеҙенә тиклем алып барылып, бында һәм Дайламала юғары хаҡҡа һатыла. Был ҡалала балсыҡтан төрлө нәмәләр, шул иҫәптән юғары сифатлы һәм тиҙ ватылмай торған көршәктәр яһала. Был йылғаның ярҙарында төрлө төҫтәге ҡиммәтле таштар осрай, улар араһында лазурит күп. Был йылғалағы балыҡтарҙың сорттары һәм йыландарҙың төрҙәре шул тиклем күп, хатта уларҙы һөйләп тә, һанап та бөтөрлөк түгел. Нәмджан ҡалаһы кешеләре үҙҙәре өсөн төп аҙыҡ булған балыҡты бик ҙур таһыллыҡ һәм сослоҡ менән тота. Тотолған балыҡтың күберәк өлөшөн, һаҡлау өсөн тәмләткестәр һибеп, тоҙлап, караптарға тейәп, Хазар диңгеҙенә алып төшәләр, яр буйлап Исил ҡалаһына һәм башҡа урындарға тиклем барып етеп, һатыу итәләр, йәиһә үҙҙәре теләгәнсә тотоналар.

Нәмджан ҡалаһынан Гүрханға тиклем һигеҙ күсем ер. Был Аскутийа ере төркиҙәренең күп халыҡлы ҙур ҡалаһы. Ул Табаристан (Каспий. - **Ред.**) диңгеҙенә ҡойған Исил (Иҙел, йәки Волга. - **Ред.**) йылғаһынан төньяҡ тарафта урынлашҡан. Ҡала яҡшы төҙөкләндерелгән, тирә-яғы эшкәртелгән, бында ҡайһы саҡта күрһәтелгән йылға буйлап, сауҙагәрҙәр һәм сәйәхәтселәр килеп йөрөй. Бында Аскутийа төркиҙәре хакимы йәшәй, уның ҡарамағында күп һанлы яугирҙар, ҡорамал һәм ҡоралдар, күп ҡәлғәләр, эшкәртелгән ерҙәр бар. Был илдә һөнәрселек тауарҙары һәм сәнғәт әйберҙәренән тик көнкүреш өсөн кәрәклеләрен генә эшләмәйҙәр, шулай уҡ улар яһаған эйәр һәм ҡоралдар шул тиклем күркәм һәм камил - быңдайҙар төркиҙәрҙең башҡа бер илендә лә етештерелмәй. Гүрхан ҡалаһынан Ҡаруҡийаға тиклем Анхадара йылғаһы буйлап һигеҙ көнлөк юл, ә ҡоронан - көнбайышҡа табан ун алты күсем. Ҡаруҡийа - ағас ҡоролмаларҙан һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала. Уға ерҙәре бынан ун алты күсем арала булған булғарҙар йыш һөжүм итеп тора, һәм улар әлмисаҡтан бирле бер-береһе менән даими һуғышып йәшәй.

Ҡаруҡийа ҡалаһынан төньяҡҡа тышҡы башҡорттарға тиклем үтеп сығыуы ауыр булған тауҙар, насар юлдар һәм тар һуҡмаҡтар буйлап ун күсем ара. Ҡаруҡийа һәм эске башҡорттар араһы үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар һәм юлһыҙ ерҙәрҙән ун ике күсем. Басджирттарҙың иле ҙур, уның айырым өлөштәре бер-береһенән ҙур алыҫлыҡта ята. Эске басджирттар иле үҙәге менән тышҡы басджирттар иле үҙәге араһы ун бер күсем ер. Үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса басджирт халҡы төрки-булғарҙарға оҡшаш. Кейемдәре - оҙон куртка. Беҙ был турала етерлек яҙғайныҡ инде.

### VII климат, 7-се секция

Етенсе климаттың етенсе секцияһында Басджирт иленең дауамы, Һаҫыҡ ерҙең төньяҡ өлөшө һәм Бәджнәк иленең ҙур өлөшө тураһында бәйән ителә. Эске басджирттарҙың ҡалаларынан Мастр һәм Ҡастрҙы атап була. Был ике ҡала ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр бында һирәк килә. Унда бер кемдең дә булғаны юҡ, сөнки урындағы халыҡ илдәре аша үтеп сығырға теләүсе бөтә сит ил кешеләрен үлтереп тора. Был ике ҡала Исилгә ҡойған йылға буйында урынлашҡан.

Бәджнәк иленә килгәндә, ул ҙур түгел. Беҙгә килеп еткән хәбәрҙәргә ярашлы, унда Йәкәмуни ҡалаһынан башҡа ҙур ҡалалар юҡ. Унда йәшәүселәр күп һанлы, улар әр Рум иле яғынан сиктәш әр Русийа иле кешеләре менән һуғышыусы төркиҙәрҙән була. Улар үҙҙәренә һөжүм итә алмаһындар өсөн тауҙар һәм урмандар араһына йәшеренә. Бәджнәк халҡында әр Русийа халҡындағы кеүек, мәйеттәрҙе яндырыу йолаһы бар. Уларҙың ҡайһылары һаҡалдарын ҡырып йөрөй, башҡалары үреп ҡуя. Кейемдәре оҙон булмаған куртканан ғибәрәт. Уларҙың телдәре рустарҙың теленән дә, басджирттарҙың теленән дә айырылып тора.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әҙерләне.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

Корпустың алдараҡ атап үтелгән бойороғона (1945 йылдың 31 мартындағы) ярашлы, Томашув-Мазовецки, Лодзь ҡалаларын алған саҡта һәм Одер йылғаһында күрһәткән тиңһеҙ батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнәләр: 62-се гв. атлы полкының станковый пулемет расчеты командиры, гв. старшинаһы Шестаков Степан Игнатьевич, (Баймаҡ районының Сибай рудннигынан); шул уҡ полктың 3-сө эскадронының взвод командиры, гв. лейтенанты Рязанов Павел Тихонович, Молотов (хәҙерге Пермь) өлкәһенең Көнгөр ҡалаһынан; шул уҡ полктың разведчигы, гв. рядовойы Буров Алексей Никифорович (Калинин, хәҙерге Тверь өлкәһенән); шул уҡ полктың тағы ла бер разведчигы, гв. рядовойы Желтов Николай Филиппович (Красноярск крайынан).

Корпус командирының 1945 йылдың 8, 15, 23 февралендәге һәм 19 мартындағы бойороҡтарына ярашлы, I дәрәжә Ватан һуғышы орденына лайыҡ булыусылар: корпустың 23-сө айырым бәйләнеш авиазвеноһы осоусыһы, гв. кесе лейтенанты Григорьев Федор Васильевич (Бишбүләк районының "Красный борец" колхозынан); 148-се гв. артиллерия-миномет полкының топографик разведка командиры, гв. сержанты Дровалев Михаил Макарович, (Хәйбулла районынан); 58-се гв. атлы полкының 45-миллиметрлы танкыларға ҡаршы батареяһы командиры, гв. өлк. лейтенанты Федосеев Анатолий Григорьевич, (Өфө районының Березовка ауылынан); 62-се гв. атлы полкының станковый пулемет тоҫҡаусыһы, гв. рядовойы Лавриков Федор Иванович; 32-се танк полкының Т-34 танкыһының механик-водителе, старшина Трухачев Валентин Алексеевич; 60-сы гв. атлы полкының взвод командиры, гв. өлк. лейтенанты Алексанян Самвел Арютюнович.

Бынан тыш, дивизия командиры үҙенең бойороғо менән рядовойҙарҙың һәм сержанттарҙың ҙур бер төркөмөн Ҡыҙыл Йондоҙ, III дәрәжә Дан ордендары, "Батырлыҡ өсөн", "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләй.

1-се Белорус фронты ғәскәрҙәре командующийы, Советтар Союзы маршалы Г. К. Жуковтың 1945 йылдың 10 февралендәге бойороғона ярашлы, Ҡыҙыл Байраҡ орденына 60-сы гв. атлы полкының разведка офицеры, гв. өлк. лейтенанты Калашников Иван Николаевич лайыҡ була; 62-се гв. атлы полкының штаб начальнигы ярҙамсыһы, гв. капитаны Сәйфуллин Ғәли Хәлил улы Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

# БЕЛЕМЛЕЛӘР

## йәки Бала мәктәпкә тиклем үк

**Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, донъя кимәлендәге төрлө үҙгәрештәр тормошобоҙға туранан-тура йоғонто яһап, йылдан-йыл һәр даирәгә яңылыҡтар индереп тора. Мәғариф өлкәһенән дә был прогресс, һис шикһеҙ, урап үтмәй. Мәктәптәрҙә уҡытыу һәм балаларҙың аң-белем кимәленә ҡарата талаптар арта. Был үҙ сиратында йәмғиәттә яңы һөнәрҙәр, эш төрҙәрен, өҫтәмә белем биреү йүнәлештәре барлыҡҡа килеүгә сәбәп. Шундай заман талаптарына яуап биргән эш йүнәлештәренең береһен һайлап, Өфө ҡалаһының Чесноковка биҫтәһендә "Супер ум" тигән шәхси клуб булдырған Лилиә Ғайса ҡыҙы ӘЛМӨХӘМӘТОВА менән әңгәмәләштек.**



**Һеҙҙең клубта 5-10 йәшлек балалар уҡырға һәм тиҙ уҡырға өйрәнә икән. Нисек башлап киттегеҙ был үтә яуаплы эште, шул турала һөйләп үтһәгеҙ ине.**

- Мин сығышым менән Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан, Башҡорт дәүләт университетын 2003 йылда тамамланым. Башҡорт-инглиз телдәре йүнәлешендә белем алдым. Әсәйем әйтеүенсә, мин өс йәш ярымлыҡ сағымда уҡ хәрефтәр танып, уҡый башлағанмын. Сөнки абзыйым беренсе класҡа уҡырға төшкән һәм мин дә униң ынғайына өйрәнгәнмен. Атай-әсәй махсус уҡырға өйрәтеп ултырғанын хәтерләмәйем, уларҙың быға ваҡыттары ла булмағандыр донъя мәшәҡәттәре араһында. Хәҙерге заман ата-әсәләре кеүек, бала менән махсус шөғөлләнергә, ниндәйҙер әҙерлек дәрестәренә, түңәрәктәргә йөрөтөргә беҙ үҫкәндә мөмкинлектәр юҡ ине бит. Әммә белемгә ынтылышым һәр ваҡыт юғары булды. Быны быуынымда уҡымышлылар булыуына, әсәйем ягынан олатайымдың китаптар уҡырға яратыуына, ғүмер буйы һөнәри лицейҙа эшләп, хөрмәт ҡаҙанған уҡытыусы атайыма бәйләп тә аңлатам үҙемсә.

Бәләкәй генә саҡтан уҡырға өйрәнеп, балалар өсөн китаптарҙы ҡат-ҡат уҡып сыҡҡас, әсәйемдәр алдырған гәзит-журналдарҙы тотоп ултыра торғайным. Быны шулай китап уҡыуға һөйөүем, уҡытыусы булыу хыялым мине Башҡорт дәүләт университетына алып килде. Уны тамамлағас, дәүләт мәктәптәрендә эш башланым, колледж студенттарын да бер аҙ уҡыттым, министрлыҡта ла эшләп алдым. Ә инде кейәүгә сығып, балабыҙ тыуғас, бәләкәй балаларҙы уҡытыу теләге уянды. Декрет ялында ултырғанда үҙебеҙ йәшәгән йорт эргәһендә генә тиҙ уҡытыу клубына уҡытыусылар йыйыуҙары тураһында иғлан күреп, шунда эшкә барҙым. Башланғыс кластар уҡытыусыһы булмағас, белемемде камиллаштырырға ла тура килде. Был эшем күңелемә бик ятты, 4-10 йәшлек балаларға белем бирҙем. Ә инде икенсегә әсәй булғас, үҙ эшемде булдырыу ниәте уянды. Сөнки ике бала менән ҡайҙалыр йөрөп эшләүе ауырлашты, балаларҙы ҡалдырып торорға кеше юҡ. Өлкән улыбыҙ мәктәпкә барҙы, ә бәләкәсебеҙ ҡулда ине. Тәүҙә дәрестәрҙе фатирыбыҙҙа үткәрергәме тип уйланым, сөнки ҡуртымға бер кабинет алһам, хаҡын түләй алырмынмы, балалар йыйылырмы, тигән шик бар ине.

Шөкөр, үҙendең ҡулыңдан килгән эште яҡшы башҡарһаң, кеше уны һиҙә, һөҙөмтәләрен күрә икән. Баштараҡ таныштар аша ишетеп-белгән кешеләр балаларын уҡырға өйрәтергә йөрөттө һәм шулай яйлап эшем яйға һалынып китте. Даими рәүештә камиллашып, эш йүнәлешем буйынса төрлө курстар, уҡыуҙар, семинарҙар үтеп торам. Әлеге көндә Чесноковка биҫтәһендә үҙемдең кабинетым бар, иллегә яҡын балаға белем бирәм. Балалар аҙнаһына ике йәки өс тапҡыр дәрескә йөрөй. Һәр төркөмдөң тәғәйен дәрес сәғәттәре бар, мәҫәлән, мәктәпкә әҙерлек курсы сентябрь айынан башланып, майға тиклем дауам итә. Ә "Азбука" курсында 35-40 дәрес үтәләр, башҡа белем биреү үҙәктәренән айырмалы рәүештә, бер хәрефте өйрәнгәс тә уҡый башлай балалар. Кисә генә хәреф танымаған баланың уҡып китеүен ата-әсәһе күрә, эшемде юғары баһалай. Быға тиклем дәрестәремде русса алып барҙым, әммә күптән түгел бер шәхси башҡорт балалар баҡсаһынан мөрәжәғәт иттеләр һәм шунда эшләй башланым. Хәҙер баланы башҡортса ла тиҙ уҡырға өйрәтеү буйынса үҙ методикамды яҙыу хыялым тыуҙы.

Социаль селтәрҙәрҙә тормошом, эшем тураһында яңылыҡтар менән бүлешеп торғас, коллегаларым да эшмәкәрлегемде күреп, кәңәш артынан мөрәжәғәт итә башланы. Шуға былтырҙан алып педагогтарға социаль селтәрҙәрҙә нисек эшләргә, үҙенде танытырға, ата-әсәләр менән мөнәсәбәттәрҙе яйларға, уҡыусыларҙы йәлеп итергә кеүек бөгөнгө көндә мөһим йүнәлештәрҙә консультациялар ойоштора башланым. Үҙебеҙҙең республиканан ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, хатта Ҡаҙағстандан уҡытыусылар теләп яҙыла, кәңәштәргә ҡолаҡ һала.

**Беҙ бала саҡта мәктәпкә барғансы уҡый белеү мотлаҡ түгел ине, хатта балаға дәрестә ҡыҙыҡ булмаясаҡ тип, быны хупламанылар ҙа. Ә хәҙер ни өсөн мәктәпкә тиклем үк хәрефтәрҙе танып ҡына түгел, хатта тиҙ уҡый белеп барырға тейеш бала?**

- Беренсенән, хәҙер уҡыу программаһы бик ныҡ үҙгәреш кисерҙе. Беренсе класс балаһы үткән уҡыу программаһын асып ҡараһаң, унда хәрефтәрҙе таныырға өйрәтә торған мәғлүмәт юҡ тиерлек. "Азбука" бүлегендә "Уҡый беләһең икән, уҡы" тип яҙылған. Дәреслектә ижекә бүлеп уҡырға өйрәтелгән бүлек юҡ. Шуға уҡытыусы хәрефтәрҙе өйрәтеүен өйрәтһә лә, ҡышҡы каникулдарға тиклем уҡыу тиҙлеген тикшерә һәм бала минутына 25-30 һүҙҙән дә кәм уҡымаҫҡа тейеш, тигән талап ҡуя. Ә балаға бөтә мәғлүмәтте лә бер юлы үҙләштереүе ауыр булыуы ихтимал, тиҫтерҙәренән артта ҡалып, үҙен кәм тойоуы ла бар. Быны ошондай ҡыйынлыҡтар килеп тыумаһын өсөн баланы мәктәпкә әҙерләп ебәрергә, уҡырға өйрәтергә, дәрестәрҙә ултырырға күнектерергә кәрәк.

Икенсенән, беҙҙең быуын гаджеттар, интернет кеүек бәләне белмәне. Хәтерегеҙҙә булһа, телевизорҙан йәкшәмбе көнө генә иртә менән бер нисә сәғәт йәнһүрәттәр күрһәтелә лә, шуның менән вәссәләм. Ә хәҙер бала ҡасан теләй, шул ваҡытта йәнһүрәт ҡарай, уйын уйнай һәм уҡыуға ҡыҙыҡһыныуы икенсе планға күсә. Бәләкәйҙән китаптар уҡырға яратып үҫһен өсөн ата-әсә балаһын тиҙерәк уҡырға өйрәтергә, мауыҡтырғыс дәрестәргә йөрөтөргә мәжбүр. Телефонда һәм компьютер артында оҙаҡ ултырмаһын өсөн өҫтәмә белем бирергә, башҡа эштәр менән шөғөлләндерергә тырышалар.

**Мәктәпкә барғас, унда үткәрелгән дәрестәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы һүрелмәйме икән баланың? Ҡайны бер тиҫтерҙәре яйлап уҡырға күнеккәнсе, ул барыһын да алдан белеп торасаҡ бит...**

- Юҡтыр тим, сөнки яңы уҡырға төшкән балаға мәктәпкә йөрөү үҙе үк яңылыҡ, яңы мөхит, танышлыҡтар, төрлө саралар. Нигеҙ белеме булыуы ҡамасау итмәйәсәк. Мин дәрестәрҙә мәктәптә үтә торған темаларҙың, белемдәрҙең барыһын да өйрәтмәйем. Ни бары дөйөм донъяға ҡараштарын киңәйтеү йәһәтенән тирә-яҡ тәбиғәт, математика өлкәләренә иғтибар бүләм, балалар уйындар аша өйрәнә. Тиҙ уҡыу - минутына иң күп һүҙ уҡый алыуҙы аңлатмай, ә ниндәйҙер тексты бер тапҡыр уҡып, аңлап, һөйләп биреүҙе күҙ уңында тота. Сөнки ҡайһы бер балалар уҡыуын уҡыйҙар, тик, ҡыҙғаныҫҡа күрә, нимә тураһында яҙылғанын аңламайҙар.

**Быға әлеге лә баяғы гаджеттар йоғонтоһо бармы икән? Мәғәнәһеҙ уйындар, бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлаған мәғәнәһеҙ йырлы клиптар ҡарау баланың аңлап-белеү һәләтенә тәьҫир итә аламы?**

- Йоғонтоһо булмай ҡалмайҙыр инде ул. Шуға үҙем дә балаларым нимә менән шөғөлләнеүен, ниндәй йәнһүрәттәр ҡарауын, ниндәй уйындар уйнауын күҙәтеп торам. Интернетта файҙалыһына ҡарағанда файҙаһыҙы күберәк, кемдәр генә нимәгә генә өйрәтмәй унда. Интернет ҡушымталарҙы көйләп, яҡшы тәьҫир итмәҫтәй нәмәләрҙе блокка ҡуйып тороу кәрәк. Әммә заманаһына күрә, балалар телефонды йә компьютерҙы ҡулланмай тора алмай, һәм бында ата-әсәнең төп бурысы - сама белергә өйрәтеү. Уҡыусылар араһында кеменең гаджеттар менән артыҡ мауыҡыуы шунда уҡ һиҙелеп тороуын билдәләр инем: баланың дәрестә тын ғына уҡып ултырырға, тынларға ихтыяр көсө етмәй. Бында инде беҙгә, уҡытыусыларға, хәйләкәрерәк булырға, баланың иғтибарын йәлеп итергә тырышырға ғына

*Мин дәрестәрҙә мәктәптә үтә торған темаларҙың, белемдәрҙең барыһын да өйрәтмәйем. Ни бары дөйөм донъяға ҡараштарын киңәйтеү йәһәтенән тирә-яҡ тәбиғәт, математика өлкәләренә иғтибар бүләм, балалар уйындар аша өйрәнә. Тиҙ уҡыу - минутына иң күп һүҙ уҡый алыуҙы аңлатмай, ә ниндәйҙер тексты бер тапҡыр уҡып, аңлап, һөйләп биреүҙе күҙ уңында тота. Сөнки ҡайһы бер балалар уҡыуын уҡыйҙар, тик, ҡыҙғаныҫҡа күрә, нимә тураһында яҙылғанын аңламайҙар.*

✓ *Был тормошта юғалып ҡалмау өсөн төп шарт - ул үҙеңә "Халҡыма ниндәй файҙа килтерә алам?" тигән һорауҙы биреп, эштәрең менән шуға яуап биреп йәшәү. Ҡулланыусы булып ҡына үткәрмәйек был ғүмерҙе.*

# КҮККӘ АШЫР,

## уҡырға өйрәнһенме?

**Педагогтарға ла курстар үткәреүегеҙ тураһында телгә алғайнығыҙ...**

- Беҙ бала саҡта уҡытыусы иң абруйлы кеше ине, ул әйткән һәр һүҙҙе дөрөҫкә ала, ул әйткәнсә эшләй торғайныҡ. Ә хәҙер, ҡыҙғаныҫҡа күрә, уҡытыусы һөнәренең бәҫе төштө. Бының сәбәптәренең береһе - түбән эш хаҡы, икенсеһе - ата-әсәләрҙең мөнәсәбәте һәм башҡалар. Исмаһам, тәүге факторҙы яҡшыртыу өсөн, тимәк, тейешле кимәлдә эш хаҡы алып эшләү маҡсатында мәктәптә эште арттырып, күберәк сәғәттәр алыу урынына, буш ваҡытында үҙ эштәрең менән шөғөлләнеү өҫтөнлөклө тип иҫәпләйем. Хөкүмәт үҙмәшғүллек йәки репетитор эшенә ҡаршы төшмәй бит. Шуға һәр яҡлап һөнәри белемеңде, кимәлеңде үҫтереү һәм үҙеңде башҡаларға танытыу зарур.

Бөтә уҡытыусылар ҙа репетиторлыҡ менән шөғөлләнһен, тимәйем. Әммә башҡорт теле буйынса репетиторҙар бик тә кәрәк беҙгә. Быны шунан сығып әйтәм: улыбыҙ дөйөм мәктәптә уҡый һәм башҡорт телен белеү кимәле аҡһап китте, быйыл уға туған телебеҙҙән репетитор эҙләнек, ләкин оҙаҡ ҡына таба алманыҡ. Бөтә кеше иғландар һала торған әллә нисә популяр ҡушымтала эҙләп ҡараным, башҡорт теле уҡытыусыларынан юҡ. Таныштарға мөрәжәғәт итеп, улар аша бер уҡытыусыны табып, улымды йөрөттөк. Бөтә Башҡортостанға башҡорт теленән бер генә репетитор булырға тейеш түгел дә инде. Ни тиһәң дә, ҙур ҡалаларҙа, йәки республикабыҙҙан, Рәсәйҙән бөтөнләй ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ араһында балаһына туған телен өйрәтергә теләгәндәр күп ҡала. Дәрестә бер төрлө генә эш менән булыштырмаҫҡа, күпмелер ваҡыттан һуң икенсе шөғөлгә күсергә, даими рәүештә шулай үҙгәртеп торорға кәрәк. Был йәһәттән миңә даими уҡып, курстар үтеп тороу ярҙам итә: төрлө методикаларға таянып эшләйем. Балаларға мауыҡтырғыс булһын өсөн йыш ҡына уйын методикаһын ҡулланам һәм улар ысынлап та дәрестәргә бик ятратып йөрөй. Хәрефтәрҙе өйрәнгән саҡта беҙгә айыу, ҡуян, юлбарыҫ йәки башҡа берәй уйынсыҡ "ҡунаҡҡа килә". Ижектәрҙе ҡушып уҡығанда баҡаға өйөнә барып етергә ярҙам итәбеҙ, терпегә алмалар йыйышабыҙмы шунда. Балалар бындай эштәрҙе айырыуса ихлас башҡара, улар эскерһеҙ, ярҙам итергә ашҡынып торалар.

бит. Йә беҙҙең кеүек үк күп кенә ата-әсәләрҙең балаһын башҡорт мәктәбенә уҡырға бирергә мөмкинлеге юҡтыр, ә балаға мәктәптә алған белеме етмәйҙер. Мин улымдың туған телендә телмәрен байытырға, фекерләү ҡеүәһен үҫтерергә теләйем һәм үҙ һөнәренең оҫтаһы булған уҡытыусыға тейешле хаҡ түләргә әҙермен.

Бының мөһимлеген, башҡорт теленән өҫтәмә дәрестәр алыуҙың кәрәклеген уҡытыусылар үҙҙәре лә күрһәтергә тейеш кешеләргә. Башҡорт телен өйрәткән профессионалдарға ихтыяждары барлығын аңлаһындар. Быны үҙ тәжрибәмдән сығып та әйтә алам: ҡайһы бер ата-әсә балаһына мәктәпкә барырҙан алда уҡырға өйрәнергә кәрәклеге хаҡында уйланмаҫҡа ла мөмкин, уларға быны мөһимлеген аңлатыу, күрһәтеү кәрәк. Шул саҡта уларҙың теләге лә уяна, аҡса бүлергә лә мөмкинлек таба. Хәҙер береһененең дә өйөнә йөрөргә кәрәкмәй, интернеты ғына булһын. Бер һүҙ менән әйткәндә, мөмкинлектәр сикһеҙ күп. Ә башҡорт телен, туған телеңде белеүҙең мөһимлеген аңлаған ата-әсәләрҙең һаны йылдан-йыл арта һәм репетиторлыҡ менән шөғөлләнгән уҡытыусы аҡса эшләп кенә ҡалмаясаҡ, үҙ халҡының киләсәгенә баһалап бөткөһөҙ өлөш индерәсәк.

*Башҡорт теленән өҫтәмә дәрестәр алыуҙың кәрәклеген уҡытыусылар үҙҙәре лә күрһәтергә тейеш кешеләргә. Башҡорт телен өйрәткән профессионалдарға ихтыяждары барлығын аңлаһындар. Быны үҙ тәжрибәмдән сығып та әйтә алам: ҡайһы бер ата-әсә балаһына мәктәпкә барырҙан алда уҡырға өйрәнергә кәрәклеге хаҡында уйланмаҫҡа ла мөмкин, уларға быны мөһимлеген аңлатыу, күрһәтеү кәрәк. Шул саҡта уларҙың теләге лә уяна, аҡса бүлергә лә мөмкинлек таба. Хәҙер береһененең дә өйөнә йөрөргә кәрәкмәй, интернетың ғына булһын. Бер һүҙ менән әйткәндә, мөмкинлектәр сикһеҙ күп. Ә башҡорт телен, туған телеңде белеүҙең мөһимлеген аңлаған ата-әсәләрҙең һаны йылдан-йыл арта һәм репетиторлыҡ менән шөғөлләнгән уҡытыусы аҡса эшләп кенә ҡалмаясаҡ, үҙ халҡының киләсәгенә баһалап бөткөһөҙ өлөш индерәсәк.*

Ә инде һине башҡорт теленән иң яҡшы уҡытыусы тип белһендәр өсөн, һис шикһеҙ, бөгөнгө заманда интернет киңлектәрендә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем эшләргә кәрәк. Был ата-әсәләр менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыуға ла булышлыҡ итәсәк, сөнки улар уҡытыусының эшен күреп-белеп торасаҡ. Аҙнаһына бер видео, бер нисә фото ҡуйһаң да эшең күренә. Аңлашылмаусанлыҡтар белмәгәнлектән барлыҡҡа килә, шуға уҡытыусы үҙенең эшен күрһәтеп торһа, яҡшыраҡ булыр ине. Был шәхси брендыңды булдырырға ла булышлыҡ итәсәк. Социаль селтәрҙә һине танып белеп, үрләтеп тә ебәреүҙәре ихтимал.

Нишләптер блогерҙарға ҡарата кире ҡараш формалашҡан күптәрҙә. Уларҙың да төрлөһө була: лайфстайл - көн дауамында үҙенең нимә эшләгәнен күрһәтә, эксперттар - үҙенең һөнәри өлкәһендә, йәки шөғөлө буйынса белгес фекерҙәрен еткергән, нимәгәлер өйрәткән кешеләр. Шәхси брендын булдырырға теләгәндәр нәҡ эксперт блогы алып баралар, улар файҙалы мәғлүмәт менән уртаҡлаша, еңеүҙәре, өлгәштәре тураһында һөйләй. Ата-әсәләр ҙә, етәкселек тә күреп тора һәм иғтибар итә: әһә, был уҡытыусы юғары квалификациялы, әүҙем, балаларҙы ярата, илһөйәр, күп яҡлы белемле һ.б. Бөтә нәмәне шулай күрһәтә белеү шарт, шәхесең ниндәй булыуын башҡалар белһен.

**Үҙ эшеңде асыуы еңелдәрҙән түгел. Ә күптәр тиҙ генә юғары килем алырға иҫәп тота. Ашыҡҡан ашҡа бешкән, тиҙәр, эшҡыуарға түҙемлек кәрәкме?**

- Түҙемлек бөтә ерҙә лә кәрәктер ул. Шунһыҙ булмай. Мин дә бит өҫтәмә белем биреү өлкәһендә ҡапыл ғына эш башламаным, тәүҙә тәжрибә тупланым, башҡаларҙан өйрәндем һәм үҙемә ышаныс уянғас ҡына эш башланым. Ҡапыл тотоноп, үҙ эшен булдырғандар, йәки тәүҙән үк юғары килем алырға иҫәп тотҡандарҙы нисектер битәрләй алмайым. Бәлки, улар хаҡлылыр ҙа. Бигерәк тә йәштәрҙең фекерләүе бөтөнләй башҡаса, улар әлеге лә баяғы социаль селтәрҙәрҙә уңышҡа өлгәшкәндәрҙе күп ҡарай һәм араларында бер курс ҡына үтеп, байығып китеүҙәре тураһында бәйән итеүселәр юҡ түгел. Миненсә, нимәгәлер өлгәшәм тиһәң, тәжрибә туплау кәрәк. Башлаған мәлдә үк юғары килем алмауың да ихтимал, тик көнделек төшөрмәҫкә һәм артабан эшең яйға һалынһын өсөн үҙеңә файҙалы бәйләнештәр булдырыуҙы дауам итергә, тырышырға һәм күп көс түгергә кәрәк.

Үҙ эшен булдырырға теләп тә, нимәнән башларға белмәгәндәр була. Бындай осраҡта күңеленә ятҡан шөғөлгә тотоноу, йәки алған һөнәрең буйынса эш башлауҙың мөһимлеген әйтеп үткем килә. Һөнәреңде яратаһың икән, балаларға һәм үҙ халҡыңа файҙа килтерергә теләйһең икән, ошо өлкәлә эшеңде дауам ит. Тырнаҡ эшләүе килемлерәктер ҙә, әммә аҙаҡ киренән мөғәллимлеккә әйләнеп ҡайтыуың икеле һәм әллә нисә йыл алған белемең, бала саҡ хыялың, тырышлығың юҡҡа сығасаҡ.

**Был тиҙ үҙгәреүсән тормошта юғалып ҡалмаҫ өсөн заман башҡорт ҡатын-ҡыҙы ниндәй булырға тейеш?**

- Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ғына түгел, ғөмүмән, милләттәштәребеҙгә шундай кәңәшем бар: уҡығыҙ. Белем алырға ынтылыш һәр ваҡыт яңы ишектәр аса, үҙеңә ҡарата ышаныс уята, тормош һынауҙарын үткәндә ярҙам итер бер ныҡлы үҙәкте барлыҡҡа килтерә. Шулай уҡ ҡыйыуыраҡ булыу ҙа кәрәк. Ә бына нәҡ ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә, электән шулай һалынғандыр инде ул, иргә ҡарап йәшәүселәр арабыҙҙа күберәк һымаҡ. Мин дә элек шулай ирем аҡсаны күберәк эшләргә тейеш, мин күберәк ала башлаһам, мөнәсәбәттәребеҙ үҙгәрер, тип уйлай торғайным. Әммә хәҙер икенсе ҡараштамын. Ир ҙә, ҡатын да бер үк эшләп, ғаилә бюджетына өлөш индерергә тырышырға тейеш. Ҡатынына ҡарап ире лә ғаиләһе өсөн нығыраҡ тырыша башлауы, үҫешкә ынтылыуы, яңы мөмкинлектәр эҙләүе ихтимал. Миңә быны бер Рәсәй кимәлендә билдәле психолог ҡатын төшөнөргә ярҙам итте. Ул үҙе лә аҡса эшләй һәм бөтә ғаиләһен үҙ аҡсаһына йылы яҡҡа ял итергә лә алып бара ала, нимәлер һатып алыр өсөн иренән аҡса һорап, көтөп тә ултырмай. Ә бит беҙҙең башҡорт ҡатындары араһында ла ире артына йәшенеп йәшәмәгән, төрлө ҡаҙаныштарға өлгәшкәндәр бар. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеванан өлгө алайыҡ. Ул үҙенең һәләттәрен асып, яҙыусылыҡ эшенә тотонмаһа, романдарын ижад итмәһә, башҡорттарҙан беренсе трилогия ижад иткән ҡатын-ҡыҙ яҙыусы булыр инеме? Шуға ҡайһы осраҡтарҙа үҙеңде беренсе урынға ҡуя белеү ҙә мөһимдер. Башҡаларҙы уйлап, үҙең тураһында онотоп йәшәһәң, һине бер кем дә хәстәрләмәйәсәк. "Миңә ярай инде", тип түҙеп йәшәргә ярамай, кәрәк саҡта үҙ һүҙеңде әйтә белеү мөһим.

Шулай ҙа был тормошта юғалып ҡалмау өсөн төп шарт - ул үҙеңә "Халҡыма ниндәй файҙа килтерә алам?" тигән һорауҙы биреп, эштәрең менән шуға яуап биреп йәшәү. Ҡулланыусы булып ҡына үткәрмәйек был ғүмерҙе. Әлбиттә, матди донъяла йәшәгәс, аҡсаһы ла кәрәк. Ләкин кешенең тормошон мәғәнәле итер маҡсаты булырға тейеш. Был мөһим.

**Быйыл Ғаилә йылы һәм бөтә ил буйынса ғаилә ҡиммәттәренә иғтибар йүнәлтелә. Һеҙҙең өсөн ғаилә нимә ул? Был йылда ниндәй мәсьәләләр хәл ителергә тейеш?**

- Ғаилә - тормошомдоң иң мөһим өлөшө. Ул һәр яҡлап үҫешергә, эшләргә этәргес көс бирә. Балаларыбыҙ тыуғас, ирем менән беҙҙең маҡсаттарыбыҙ, эшләргә теләгән эштәребеҙ тағы ла артты һәм мотивациябыҙ барлыҡҡа килде. Ғаиләм булмаһа, бәлки, ниндәйҙер айырым уңыштарға өлгәшмәгән дә булыр инем. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙға яҡшы иптәш табыу мөһим. Ә инде үҙ халҡын уйлаған ҡыҙҙар тормош иптәшен үҙ милләтенән һайларға, аҙаҡ балаларына ла ошоно аңлатып үҫтеререгә бурыслы. Был йәһәттән мин бик уңдым, шөкөр. Ирем балаларҙы бик ярата, миңә һәр ваҡыт ярҙам итеп тора. Быны өсөн ҡайны-ҡәйнәмә рәхмәтлемен, улар үҙ-ара ла бик матур мөнәсәбәттә. Әсәйем дә һәр саҡ миңә: "Ирҙе ир иткән дә - ҡатын, хур иткән дә - ҡатын", тигән халыҡ аҡылын әйтә ине. Йәмғиәттә атайҙарҙың абруйын бермә-бер күтәреү зарурлығын күрәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Лилиә Ғайса ҡыҙы әңгәмә барышында белем алырға ынтылыш булырға тейешлеге хаҡында күп тапҡырҙар телгә алды. Тормошта уңыш ҡаҙанған күпселек үҙенең нәҡ ошо сифатына бурыслылыр, тигән фекер тыуҙы. "Белемле кеше күккә ашыр", тип хаҡ әйткәндәр шул боронғолар.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

**✓ Бына осоусы, исмаһам! Әле сынығыу үтмәгәс, был тиклем дә шәп пилоттыр тип уйламағайным! - тине. Штурмандың тауышында аптырау, һоҡланыу ноталары бергә ишетелде.**



"Минән һаҡ булығыҙ!" тип иҫкәрткәндәй, әсе ел һыҙғыра. Өтөп барған һыуыҡ. Ошо декабрь төнөндә осоусы Мәғүбә немец илбаҫарҙары техникаһы йәшеренгән урынға үҙенең төүге бомбаһын ырғытасаҡ. Фронтҡа, тап ҡатын-ҡыҙҙарҙан төҙөлгән авиация полкына эләгер өсөн, ул күп тапҡырҙар юғарыға мөрәжәғәт итте, хаттар яҙҙы, ахыр, 4-се армияның командующийы генерал-полковник Константин Андреевич Вершинин янына үтеп инә алғас ҡына был мәсьәлә ыңғай хәл ителде. Дөрөҫ, унда ла һөйләшеү еңелдән булманы, ныҡышмал ҡыҙ үҙенең урыны фронтта икәненә барыбер ышандыра алды.

Шул көндән тормошонда бөтәһе лә үҙгәрҙе. Күптәрҙе осорға өйрәткән тәжрибәле осоусы Сыртланованы Дүртенсе һауа армияһы 588-се төнгө еңел бомбардировка авиация полкы эскадрильяһында ҡуш ҡуллап ҡаршы алдылар. Мәғүбәгә хәрби әҙерлек өсөн әллә ни ваҡыт кәрәкмәй ине, шуға ла командир Евдокия Бершанскаяға мөрәжәғәт иткәндә: "Мин 1935 йылдан алып осам, тиҙерәк хәрби заданиеға ебәрегеҙ, миңә штурман кәрәкмәй, үҙем булдырам", - тип, уны аптырауға һалғайны. Бында ла ныҡышмаллыҡ, тәүәккәллек һөҙөмтә бирҙе. Ике аҙнанан төүге осошҡа иң тәжрибәле штурмандарҙың береһе Евгения Рудневаны тәғәйенләп, Сыртлановаға хәрби заданиены үтәргә бойороҡ бирҙеләр. Мәғүбә "ҡарлуғастар" тип йөрөтөлгән, ышыҡланыр урыны ла булмаған ике кабиналы биплан янына килеп баҫты. "Һин минең өсөн ҡарлуғас түгел, беҙ бер бөтөн һәм бөркөткә әйләнәсәкбеҙ!" - тине ул самолеттың фанер ҡанатын һыпырып. "Этажерка"лар, йәки "огородник"тар тиҙлек менән ҡыуандырмаһалар ҙа, ҡапыл түбәнгә төшөп, йә моторҙы һүндереп, тауышһыҙ осоуҙары менән алдыра. Мәғүбә күнекмәләр үткәндә был маневрҙарҙы күп тапҡыр яһаған бар, тимәк, йөрәге лә, ҡулы ла әҙер.

Унан эргәлә теҙелеп һалынған бомбаларҙы күҙенән үткәрҙе. Дошманға бырғытырға тейешле төүге бомба һәр саҡ иҫтә ҡала. Мәғүбә шуларҙың береһен ҡулы менән һаҡ ҡына һыпырҙы. Был бомба ҡалғандары һымаҡ уҡ, ләкин уға айырым тамға ҡуйыласаҡ. Дошман өҫтөнә төшөргә тейешле һәр төүге бомбаның үҙ билдәһе була. Мәғүбә лә ошо йолаға тоғро. Ғәҙәттә, унда "Немец оккупанттарына үлем!" тип яҙалар. Сыртланова аҡ буяуға мансылған бумаланы ҡулына алды, тик бомбаны үҙенсә билдәләне - уҡлы йәшен һүрәтен төшөрҙө һәм йәнәшәһенә "М" хәрефен өҫтәне. "Һин минең ҡулда фашисты көлгә әйләндерер йәшен буласаҡһың!"

Мәңге онотолмаҫ был декабрь төнө...

Механик ҡыҙ винтты бороуға, мотор тыңлаусан гөрләп тә ебәрҙе, шул минутта самолет ҡойроғонан ҡуйы төтөн борланы. Самолет эргәһенә килеп баҫҡан полк командиры майор Евдокия Бершанская менән парторг Мария Рунттың йөҙҙәре үтә етди.

- Иғтибарлы бул, лейтенант, - майор маршрутты йәнә күрһәткәндән һуң, фатиха ла бирҙе. - Осоштарың ишле булһын, меңгә тулһын! Хәйерле сәғәттә!

Осҡос үҙенең оло эшкә әҙер икәнен аңлатып дерелдәй, был дерелдәү Мәғүбәгә лә күсте. Ул осҡосо менә ҡуша, гүйә, бер бөтөнгә әйләнде.

Самолет һаман өҫкә күтәрелә барҙы. Хәҙер инде ҡолаҡ төбөндә ел генә һыҙғыра. Бер аҙҙан идара тотҡаһындағы бармаҡтарҙы һыуыҡ семетә башланы. Ә бейеклек һаман үҙенә саҡыра. Юғарыға күтәрелеү кинәнесе... Һәм шундай ҡараңғылыҡ... Эре-эре йондоҙҙар, ем-ем итеп, осоусы менән штурманды ғына сәләмләй кеүек.

ПО-2 кабинаһынан һикереп төшкән Евгения Руднева эскадрилья командиры урынбаҫары Марина Чечнева янына килеп баҫты һәм:

- Бына осоусы, исмаһам! Әле сынығыу үтмәгәс, был тиклем дә шәп пилоттыр тип уйламағайным! - тине. Штурмандың тауышында аптырау, һоҡланыу ноталары бергә ишетелде.

Уның артынса Сыртланова тыныс һәм ышаныслы рапорт бирҙе:

- Иптәш өлкән лейтенант, пилот Сыртланова хәрби заданиены үтәне. Маҡсат үтәлде, ике урында янғын ҡупты.

Төүге хәрби сыныҡыуы менән ихлас ҡотлап, Марина Чечнева Мәғүбә Хөсәйен ҡыҙын ҡосаҡлап уҡ алды. Ассы станицаһы эргәһендәге төүге еңеү төнө ине был.

Иртәгәһен мәшәҡәттәрҙән бушау менән Евгения уның янына килеп ултырҙы.

- Килә, - тип һөрәнләне ҡыҙ бала. - Ә ағайым?

- Ул донъяғыҙҙы ҡарап торор. Бында кәрәк.

Хөсәйен ағай мәҙрәсәлә уҡыған сағында урманлы-таулы төбәктән - Малаяҙ тигән ауылдан килеп уҡыған бер егет менән дуҫ булған икән. Иштуған ҡаты ауырып киткән тигән хәбәрҙе ишеткәс, дуҫының хәлен барып белмәк булды. Тәбиғәткә, ер-һыуға бәйле күп һорауҙар бирергә, егелгән аттың арбаһына ултырып йөрөргә яратҡан ҡыҙын да алып, әлбиттә. Нисә көн юлда булғандарҙыр, инде асыҡ әйтә алмай Мәғүбә. Атаһының күп ауылдарҙа таныштары бар ине. Бер ыңғайы күрәйем, тип, күбеһенә һуғылырға тырышты ул. Урманлы-таулы яҡтарға яҡынлашыу менән Мәғүбәнең иҫе китте. Бындай ҡарағайҙар, бындай ҡаялар! Ҡыҙҙың уларҙы төшөндә лә күргәне булманы.

# ЕҢЕҮ ҠАНАТТАРЫ

Фәрзәнә АКБУЛАТОВА

*Башҡортостандан Советтар Союзы Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булған берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ* ***Мәғүбә Сыртлановаға*** *арнала.*



Координаталарҙы теүәлләп барыусы штурман Женя Руднева тауышы яңғыраны:

- Фронт һыҙығын үтәбеҙ!

Шул уҡ минутта тиерлек, аҫтан прожекторҙар күк йөҙөн айҡай башланы, ут ҡайсылары һауаны аяуһыҙ тегеләй-былай бүлгесләй-ырҡҡыслай, күҙҙәрҙе ҡамаштырғыс яҡтылыҡтан, сағыулыҡтан Мәғүбә үҙенең ҡайҙалығын да аңламаҫ хәлгә етте. Яҡында зенит снарядтары шартланы. Һәр секунд иҫәптә, Мәғүбә үҙен тиҙ ҡулға алырға тырышты. Тәжрибәле штурман Евгения Рудневаның әйткәндәренә ҡолаҡ һалып, самолетты ҡапыл аҫҡа йүнәлтте, унан юғарыға талпынды, уңға-һулға кәйелде. Самолет ҡалтырап-ҡалтырап алды, тимәк, снаряд ҡыйырсыҡтары килеп ҡаҡлыға. Ләкин прожекторҙар самолетты юғалтҡайны инде. "Һин бөгөн бөркөт! Бирешмәйбеҙ!"

Йәнә штурман тауыш бирҙе:

- Сәпкә еттек. Аҫта фашист машиналары колоннаһы.

- Женя, уң ҡанаттағы бомбаны беренсе ташла! - тип ярһып ҡысҡырҙы Мәғүбә.

Колонна өҫтөнә бер-бер артлы бомбалар яуҙы. Аҫта көслө гөлтләү, ут ҡабартмалары ҡалҡып сыҡты. Йөгөнән бушанған самолет ҡайтыу яғына еңел бороло.

- Мәғүбә, ишеткәнһеңдер, ҡыҙҙар мине "звездочет" тип йөрөтәләр. Уның сәбәбе минең астроном булырға теләүемдә. Был сер түгел. Ә төндә һинең ауыҙыңдан мин "бөркөт" тигәнде ишеттем. Бының сере?..

Мәхүбә йылмайып ҡына ҡуйҙы.

- Быға ғәжәпләнергә ярамай, Женя. Мин бит Урал яғынан. Башҡортостан. Бөркөттәр - беҙҙә изге ҡоштар.

- Талисман, тимәк. Бөркөт насар түгел. Һинең өсөн кукурузник юҡ, ул һинең ҡулда бөркөткә әйләнәсәк, - Женя рәхәтләнеп көлдө лә, үҙ юлы менән китте.

Штурманды ҡарашы менән оҙатып ҡалған Мәғүбә ирекһеҙҙән бала саҡ хәтирәһенә сумды.

"Бөркөт күҙ. Ватан", тип ҡабатланы эстән генә. Күҙе йәшкәҙәне, сөнки был хәтирә уны Башҡортостанына алып ҡайтты. Мәғүбәнең атаһы егәрле кеше ине. Ата-бабалары ғүмер буйы сауҙагәрлек менән шөғөлләнгәндәр, хәлле йәшәнеләр. "Кәсепле кеше хәйерсе булмай ул", ти торғайны ҡартатаһы ла. Уға ун бер йәштәрҙә атаһы:

- Ҡыҙым, алыҫ сәфәр йөрөп ҡайтҡың килмәйме? - тип, тәбиғәтте яратҡан ҡыҙынан шулай тип һораны.

Хөсәйен сирле дуҫы янында ике кис ҡунды, эргәһенән китмәне лә. Мәғүбә Иштуғандың Бикмырҙа исемле улы менән дуҫлашты. Һигеҙ-туғыҙ йәштәрҙәге алсаҡ малай йәшәгән ерҙәренең тарихын яҡшы белә. Мәғүбә һымаҡ уҡ ҡырға сығып йөрөргә ярата. Ул ҡыҙҙы һыбай йөрөргә өйрәтте. Туғандары менән арбаға тейәлеп йөрөһә лә, Мәғүбә атаһы атҡа менергә ҡушмай ине. Ат бейеклегенән аҫҡа ҡараған ҡунаҡ ҡыҙы ҡыуанысынан көлөп ебәрҙе. Донъя тағы ла яҡтыраҡ, кинерәк күренде уға. Бына улар таулы-ҡаялы яҡҡа килеп сыҡтылар. Мәғүбә бейектә осоп йөрөгән нөктәләргә диҡҡәт итте.

- Ниндәй ҡоштар? - тип һораны иҫе китеп.

- Бөркөттәр бит. Танымайһыңмы ни?

- Бөркөт күргәнем юҡ, - тине ҡыҙ телен саҡ-саҡ әйләндереп, шундай бейеклек яулаған ҡоштарға иҫе киткәйне уның.

- Улар әйләнеп осоп йөрөй-йөрөй ҙә, ҡорбанын күрәләр. Уҡтай аҫҡа атылалар. Ҡотолоу юҡ.

- Үҙҙәре саҡ күренә. Нисек ҡорбанды күрәләр икән?

- Бөркөт күҙе шулай.

- Минең дә ҡош булғым килә!

Үҙенән өлкәнерәк апайға нимәләр аңлата алған малайҙың ауыҙы йырылды. Ҙурҙарса йыуатты хатта.

- Хәҙер, апай, тимер ҡоштар бар бит. Береһе һинеке булыр.

- Ә һиңә? Һиңә кәрәкмәйме?

Малай уйланғандай итте:

- Минең тимер ат булыр!

Ҡайҙа хәҙер Бикмырҙа? Бөркөтлө төбәктә үҫкән, тимер ат тураһында хыял иткән малай? Мәғүбә ҡарашын офоҡҡа төбәне. Иштуған ағай, улы Бикмырҙа тураһында бер нәмә лә белмәй. Ләкин Малаяҙҙан Мәғүбә ҡанатлы булып ҡайтты... Ә бына егерме һигеҙенсе йылда Бәләбәйҙә аэропланды үҙ күҙҙәре менән күрҙе. Һәм ысынлап та, хыялы тормошҡа ашырына ышанды.

- Киске осошҡа әҙерләнергә!

Командирҙың ҡаты тауышы Мәғүбәне ысынбарлыҡҡа алып ҡайтты. Тыныс, һәлмәк яуап яңғыраны:

- Есть! Әҙерләнергә!

* * *

Бындай "махсус осош" Мәғүбәнең ғүмерендә бер тапҡыр ғына булды: осоусы ҡыҙҙарға Элтигендағы тәғәйен урынға буш әрйәләр, контейнерҙар алып барып ташлап, ығы-зығы, тауыш эффекты булдырырға ҡушылды. Бершанская: "Командование приказын һүҙһеҙ үтәргә һәм бер ниндәй ҙә һорау бирмәҫкә!" - тине. Бөгөнгә төнгә күк самолеттар осор өсөн сағыштырмаса ҡулай. Сағыштырмаса, сөнки тегендә-бында гөрһөлдәү тауыштары ишетелә, осоусылар йүнәлеш тотасаҡ Эльтигенда дошман прожекторҙарын һүндермәй, сайпылып-сыйпылып тирә-йүндә яҡтырта. Аңлайышһыҙ, ҡыҙыҡ махсус задание алған ҡыҙҙар хатта шаяртышып-көлөшөп тә алдылар: "Беҙҙең самолеттар ысын мәғәнәһендә этажеркаға әйләнә түгелме?"

Ҡуҙғалырға бойороҡ булды. Маршрут диңгеҙ өҫтөнән үтә. Ҙур әрйәләр һауа ҡаршылығы тыуҙыра, шуға самолет әкрен оса. Эльтигенга етәрәк, мотор тауышын ишеткән фашистар хәрәкәткә килде, прожекторҙары күктә йырғысларға тотондо, зәһәр яҡтылыҡтан Мәғүбәнең күҙҙәре, әйтерһең, тишелеп сыҡты, ярай, штурман юғалып ҡалманы, тейешле координатты атауын белде, "маҡсатҡа өс минут, ике минут..."

Снаряд ярсыҡтары ҡаҡлығыуҙан тетрәнһә лә, самолет осоуын дауам итте. Тегеләрҙең тау өҫтөндәге пулеметтары тыҡылдай башланы. Иренен ҡанатҡансы тешләгән Мәғүбә уңға-һулға оҫта кәйелеп маҡсат-нөктәгә ынтылыуын белде. Мәктәп ихатаһындағы емерек окоптарға әрйәләр ауҙарылды. Бында десантсылар оборонала торғайны. Хәҙер улар Чурбаш күле менән диңгеҙ араһындағы ошо участоктан Керчҡа юл алдылар. Был ерҙә ҡалдырып китеүҙәрен бик һирәктәр генә белде. Десантсыларҙың юҡлығын баштарына ла килтермәгән фашистар Эльтигенды һаман ҡамауҙа тота. Бына нимә өсөн кәрәк икән тауыш эффекты!

**(Дауамы бар).**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# САЛАУАТ РУХЫ САҒЫЛЫШЫ

**Был арала республикала милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 270 йыл тулыу айҡанлы күп төрлө саралар ойошторола. Башҡортостандың Милли музейы ла Салауат Юлаев тураһындағы хәтерҙе һаҡлаған һәм киләсәк быуындарға уның хаҡында мәғлүмәтте еткереүсе булып тора. Музейҙа милли батырыбыҙ исеме менән бәйле уникаль экспонаттар тупланған, уға бағышлап, уның ғүмеренә, яу юлына һәм ижадына арналған күргәҙмәләр һәм башҡа саралар үткәрелә.**



Әлеге мәлдә Милли музейҙа батыр образын заманса сәнғәттә кәүҙәләндереү (сағылдырыу) буйынса Төбәк-ара конкурс һөҙөмтәләренән сығып ойошторолған "Салауат - мәңгелек батыр" исемле үҙенсәлекле күргәҙмә эшләй. Конкурсты ойоштороусы шулай уҡ Башҡортостандың Милли музейы. Экспозиция нигеҙенә һынлы сәнғәттә, графикала, биҙәү-ҡулланма сәнғәтендә һәм башҡа техникаларҙа Салауат Юлаев образын художестволы интерпретациялау һалынған.

- Конкурста ҡатнашыу өсөн Башҡортостандың төрлө төбәктәренән, Санкт-Петербург һәм Мәскәү ҡалаларынан 65 ғариза ҡабул ителеп, финалға 81 эш менән 50 оҫта үтте. Конкурс шарттарына ярашлы, һәр ҡатнашыусыға 1-ҙән 5-кә тиклем эшен тәкдим итеү мөмкинлеге булды. Билдәле рәссам, тарихсылар, сәнғәт, мәҙәниәт өлкәһендә эшләүсе тәжрибәле белгестәр һәм музей хеҙмәткәрҙәренән торған жюри 15 оҫтаны еңеүсе итеп билдәләне, - тип белдерҙе конкурстың авторы һәм кураторы, Башҡортостан Милли музейы этнография бүлегенең фәнни хеҙмәткәре Гөлйемеш Ҡылысова.

Күргәҙмәлә еңеүселәрҙең һәм финалға сығыусыларҙың Салауат Юлаевтың күп яҡлы шәхесен тәрәнерәк аңларға, милли герой образының күп яҡлылығын һәм тәрәнлеген күрергә мөмкинлек биргән үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ 75 эше урын алған. Уларҙың һәр береһе батыр йәшәгән замандың рухын сағылдырған, заманса контекстан быуаттар төпкөлөнә күҙ һалырға мөмкинлек биргән сәнғәт өлгөләре.

Конкурс дүрт номинация - биҙәү-ҡулланма (биҙәү-ғәмәли) сәнғәте, скульптура һәм пластика, һынлы сәнғәт һәм графика, сувенир продукция буйынса уҙғарылды. Һәр номинацияла 3 урын ҡаралып, еңеүселәргә аҡсалата премия тапшырылды. Еңеүселәр билдәләүенсә, бындай наградалар илһам өҫтәй, артабан ижад итеү өсөн көслө стимул булып тора һәм яңынан-яңы үрҙәр яуларға дәртләндерә.

"Сувенир продукцияһы" номинацияһында 1-се урын яулаған Рәшиҙә Минлеғолова конкурска "Ҡолаҡсын бүрек" брелогын, "Бүрек" магнитын һәм "Салауаттың яугиры - уҡсы" ҡурсағын тәкдим иткән.

- Конкурсҡа "Салауаттың яугиры - уҡсы" исеме аҫтында махсус эшләнгән ҡурсаҡ тәкдим иттем. Уның өсөн мин шул ваҡыттағы яугирҙарҙың хәрби ҡоралдарын, кейемдәренең ниндәй булыуын ентекле өйрәндем һәм эшемдә һынландырҙым. Был, үҙ сиратында, балаларға һәм ололарға милли геройыбыҙ йәшәгән осорҙо күҙ алдына баҫтырырға булышлыҡ итә, яугирҙар тураһында белемде киңәйтә. Ғөмүмән, балалар өсөн генә түгел, ә ололарға ла милли кейемдәге ҡурсаҡтар башҡорт халҡы тураһында тулы мәғлүмәт биргән сығанаҡ булып тора. Ошо эшкә тотонған ике йыл ярым эсендә 450-нән ашыу башҡорт милли кейемендәге төрлө ҡурсаҡтар эшләнем. Улар бер-береһен ҡабатламай, һәр береһенең иҫәп һаны бар. Ҡул эштәремдең республика ғына түгел, ә Рәсәй, сит ил коллекционерҙарында ла булыуы, үҙебеҙҙең милләт тураһында бик күптәрҙе таныштыра алыу мөмкинлеге менән ғорурланам, - тип үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашты Рәшиҙә Суфиян ҡыҙы.

Конкурс ағасҡа һүрәт төшөрөп, ағасты һырлап, ағасты яндырып биҙәктәр эшләнгән, фелтинг техникаһындағы ҡул эштәре, биҙәкле декоратив тәрилкәләр, Салауат Юлаев һыны төшөрөлгән шыршы уйынсыҡтары һәм перәниктәр, батырҙың ғүмер юлының төрлө осорон кәүҙәләндергән картиналар, футболка һәм башҡа төрлө сәнғәт әҫәрҙәренең төрлөлөгө һәм күплеге менән хайран итте. Милләттәштәребеҙҙең һәм төбәктә йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең Салауат Юлаевҡа ҡарата булған ихтирамы һәм тарихҡа иғтибары шатландыра. Уның быуаттар төпкөлөнән килеп еткән батырлыҡ, сәсәнлек һәм тыуған иленә ҡарата булған һөйөү осҡоно, тимәк, бөгөнгө замандаштарыбыҙ күңелендә лә йәшәй һәм дөрләй.

"Салауат - мәңгелек батыр" күргәҙмәһе Башҡортостандың Милли музейында эшләүен дауам итә. Ҡыҙыҡһыныусыларҙы ижад әҫәрҙәре менән танышырға саҡырабыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# ҠУРАЙСЫЛАР ЙЫЙЫНЫ ҮТТЕ

**Башҡортостан Ҡурайсылар союзының V йыйынында (съезы) төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе һайланды. Ул - Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, музыкант һәм педагог Салауат Кирәев.**

Ҡурайсылар йыйыны Салауат Юлаевтың тыуыуына 270 йыл тулыуға арналған "Салауат йыйыны" фольклор байрамында үтте. Сара милли батырҙың тыуған төйәгендә, Тәкәй ауылы урынында асылған "Салауат ере" тарихи-мемориал паркында ойошторолдо. Съезд эшендә Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәнис Алтынбаев, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге премия лауреаты, З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы факультеты деканы Азат Айыткулов, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Өфө дәүләт сәнғәт институтының традицион музыкаль башҡарыу һәм этномузыка кафедраһы доценты Артур Ғайсаров, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов, Башҡортостандың халыҡ артисы, Нефтекама дәүләт филармонияһының художество етәксеһе Айбулат Рәхмәтуллин, шулай уҡ билдәле ҡурайсылар, ғалимдар, фольклорсылар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре һәм республиканың милли йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре - 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.



Йыйында ҡурай традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт халыҡ музыкаһын һәм башҡарыу сәнғәтен популярлаштырыу мәсьәләләре тикшерелде. Ҡатнашыусылар ҡурайҙа уйнау оҫталығын йәш быуынға тапшырыуҙың мөһимлеген һәм йәш ҡурайсыларҙы уҡытыу өсөн шарттар булдырыу кәрәклеген билдәләне. Шулай уҡ сарала башҡорт халҡының күренекле ҡурайсыларының хәтерен мәңгеләштереү өсөн республика милкендә булған биналарҙа йәки объекттарҙа мемориаль таҡтаташтар һәм иҫтәлекле билдәләр ҡуйыу, Өфөлә милли уйын ҡоралы ҡурайға һәйкәл асыу тәкдиме лә яңғыраны. Йыйында республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова дәүләт наградалары тапшырҙы.

БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ

# ҺОНТОР ҺАҒЫНБАЙ ҺӘМ...

## һауынсы Һөйәрбикәнең һөйләшеүе

**Авторҙан: Гәзитебеҙҙең 23-сө һанындағы "Бер хәреф хикмәте" рубрикаһында Айһылыу Байбахтина яҙған "Ҡыуандыҡтың ҡыуанғаны"н уҡығас, мин дә үҙемде һынап ҡарамаҡсы булдым. Бәлки, күңелегеҙгә хуш килеп, Һөйөндөктө лә һөйөндөрөрһөгөҙ...**



Һарыҡ һарайы һаҡсыһы, һәйбәт һыпатлы, һомғол һынлы "һонтор Һағынбай" һыныҡ һаплы һәнәген һарай һикәлтәһенә һөйәне лә, Һаратын "һай-һай"лап, Һаҡмар һарҡыуындағы һыйыр һарайына һөләтләтте. Һыйыр һауыусы Һаҡмар һылыуы - һипкелле Һөйәрбикәне һөйөү һағышынан һарғайғандан-һарғая Һағынбай...

- Һауғынамы, Һөйәрбикә!

Һәндерәгә һаҡтырылған Һәлберғолаҡ Һағынбайҙың һаулашканына һиҫкәнеп, "һау-һау"ланы. Һөйәрбикә Һағынбайҙың һаулыҡ һорашҡанын һиҙмәмешкә һалышып, һаламға һонолған һауын һыйырының һыртынан һыйпаштырғыланы: "һәүкәш, һәүкәш, һәү-һәү...".

- "Һиҙәһеңме һине һөйөүемде, Һөйәрбикәкәй? Һине һағынып һарыға һабыштым. Һинең һымаҡтар һирәк, Һөйәрбикәм, һөйөклөм! Һинең һылыулығына һоҡланам, һәр һөйөү һүҙем һиңә һәм һинә, Һыуһылыуым... - Һөйөүгә һыуһаған Һағынбай һандуғастай һайраны ла һайраны.

Һүҙгә һаран Һөйәрбикә һаман һөйләшмәне. Һағынбай һөйгәненең һүҙһеҙлегенә һөмрәйҙе:

- "Һе-һе, һауалы һылыуҡай, һүҙҙәремде һанламаһаң - һанлама, һөйләшмәһәң - һөйләшмә, һәтәбе һыйырыңдың һөтөн һемерт!

Һөйәрбикә һауылған һөтөн һайыраҡ һыуытҡа һалып, Һағынбайға һондо. Һөмһөрө һүтелгән Һағынбай һоҡһорҙаныП, һөттө һорпөлдөттө. Һауытындағы һарҡындыһын һемерә-һемерә һаман һөйләнде:

- Һөтөң һыйыҡ, Һөйәрбикә, һинең һымаҡ һалҡынараҡ ...

Һағынбайҙың һайламайыраҡ һөйләнеүенә Һөйәрбикәнең һыпаты һөрөмләнде. Һөҙөмтәлә, "һүҙһеҙ" һылыу Һағынбайға һелтеле һүҙҙәрҙән һалдырҙы:

- Һөйләнмә, һәй, һантый, һорнайған һөрәт! Һыуатит! Һыпырт һаһыҡ һарыҡтарыңа, һерә! Һыйырым һөҙгәк, һеңгәҙәтә һөҙөп һалыр. Һөмһөҙләнһәң, һәҙер Һәлберғолаҡты һөслөтәм!...

- Һай-һай, Һөйәрбикә, һин дә һәс Һәлберғолаҡ һымаҡ һау-һаулашаһың...

Һағынбай "һеркәһе һыу һөймәгән" Һөйәрбикәнең һүҙҙәренә һукрана-һукрана, һикереп, Һаратына һыбайланды. Һыртына һыңҡылдатҡансы һуҡһа ла, Һарат, һабан һөйрәгәндәй һәлпәнләп, һарыҡ һарайына һәлкәүләне.

Һаҡрат һүҙҙәрҙән һауҡы һүрелгән Һағынбайҙың Һөйәрбикәгә һөйөүе һүнгәндән һүнде. Һуңғараҡ та "һөҙгәк һыйырлы" һылыуға һис һырпаланманы, һағышлы һүҙҙәр ҙә һөйләмәне. Һарыҡтарына һалам һалғанда, һирәк-һаяҡ һармаҡланы: "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме, һөймәһәң - һөйкәлмәйем..."

Һағынбайҙы һанға һуҡмағанына Һөйәрбикә һуңынан һыҙланды һыҙланыуға. Һыйыр һауған һайын һыу һөләгәндәй һомғол һынын һағынды. Һуңланы Һөйәрбикә, һуңланы... Һағынбай һайлансыҡ Һөйәрбикәнән һыуынып, һәүетемсә һилләнгәс, һатыусы Һәҙиәне һайлаНы.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨТӨНӨ ЛӘ ЗАРАРЛЫ

■ Эрисман исемендәге Мәскәү гигиена ғилми-тикшеренеү институты белгестәре сүпте көн һайын түгеп, сүп биҙрәһен йышыраҡ йыуып торорға кәңәш итә. Был йортоғоҙҙо насар еҫтәрҙән, үңәҙ бәшмәктәренән, тараҡандарҙан ғына һаҡлап ҡалмаясаҡ, аллергияның ҡайһы бер төрҙәрен булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Аҙыҡ ҡалдыҡтары бүлмә температураһында ярты сәғәттән һуң серей башлай һәм бактериялар үрсеүенә яҡшы шарттар тыуҙырыла. Ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары азот һәм көкөрттән торған химик берләшмәләр барлыҡҡа килтерә, шуға ла уларҙан ауыр еҫ тарала. Саң һурҙырғысҡа йыйылған сүп-сарҙы ла аш-һыу биҙрәһенә ташлауҙан тыйылығыҙ, был осраҡта ундағы йорт талпандары, организм өсөн башҡа хәүефле башҡа микроогранизмдарҙан торған ваҡ ҡына саң бөртөктәре кире фатир буйлап таралаcаҡ.

■ "Сәләмәт ҡала" гәзите тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ баланстың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Нидерландтар дәүләтендә таблеткалы хушбуй уйлап табылған. Был капсулаларҙы ябай витаминдар кеүек ҡабул итергә кәрәк. Таблетка составына ингән хуш еҫле молекулалар ашҡаҙанда һәм эсәктәрҙә капсуланан сығып, тир менән бергә тире аша бүленеп сыға. Бындай хушбуй авторҙары раҫлауынса, хушбуйҙың еҫе индивидуаль буласаҡ, сөнки һәр кешенең тире төрлө еҫле була. Әлегә был асыш тест үтә һәм яҡын арала һатыуҙа булмаясаҡ.

■ Табиптың кейеменә һәм сәсенә һеңеп ҡалған тәмәке төтөнөнөң микроөлөшсәләре пациенттарға, мәҫәлән, астма йәки аллергия сирлеләргә насар тәьҫир итеүе бар. Шуға ла Луизиана штатының (АҠШ) Кристус-Сент-Фрэнсис-Кабрини дауаханаһында тәмәке тартыу быйылдан тыйыла. Был яңылыҡты индереүгә 2010 йылда тамамланған тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе лә булышлыҡ итә. Мәғлүмәттәргә ярашлы, үпкә яман шеше тәмәке тартыуҙан ғына барлыҡҡа килмәй. Кейеменә тәмәке төтөнө еҫе һеңгән хеҙмәттәшегеҙ менән оҙайлы ваҡыт бер бүлмәлә ултырып эшләргә мәжбүр булһағыҙ, хәүефләнергә урын бар. Никотин туҡымала оҙайлы ваҡытҡа һаҡланып ҡала һәм һауала булған азот кислотаһы быуы менән химик реакцияға инә. Һөҙөмтәлә канцероген үҙенсәлеккә эйә булған нитрозаминдар барлыҡҡа килә. 2010 йылда Филиппиндар медицина ассоциацияһы ил территорияһындағы бөтөн дауаханаларҙа тәмәке тартыуҙы тыйғайны. 2011 йылда Ҡырым һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла ошондай тыйыу индерҙе. Беҙҙең ил дә был тенденциянан артта ҡалмай, мәҫәлән, былтыр Краснодар крайы эш урынында медицина персоналына тәмәке тартыуҙы тыйҙы.

БӘХИЛЛӘШЕҮ ҺҮҘЕ

# РУХИ ЮЛБАШСЫБЫҘ БУЛДЫ

**2012 йылда бер төркөм яҙыусылар, шағирҙар менән Мәскәүгә командировкаға барҙыҡ. Делегация составына әҙиптәр Марат Кәримов, Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар, Факиһа Туғыҙбаева, Ғәлим Хисамов, Риф Мифтахов, Әмир Әминев, Мәүлит Ямалитдинов, Фәнил Күзбәков, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Рәшит Низамов, Мөхәмәт Закиров, Мөнир Вафин, Фәниә Ғәбиҙуллина индек.**



Сәфәребеҙҙең маҡсаты 1812 йылғы Ватан һуғышына 200 йыл тулыу айҡанлы Рәсәй Яҙыусылар союзында ойошторолған сарала ҡатнашыу, илебеҙҙең баш ҡалаһындағы данлыҡлы "Бородино" панорамаһы менән танышыу, Мәскәүҙең иҫтәлекле урындарында булыу, Наполеонға ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарының иҫтәлегенә баш эйеү ине. Сәфәребеҙҙең тағы ла бер иҫтә ҡалған хәтирәһе киң билдәле Переделкино ижад йортонда йәшәүебеҙ булғандыр. Миңә лә уғата бәхет йылмайҙы: шағир һәм ғалим Рәшит ағай Шәкүр менән бер бүлмәлә йәшәнек. Бығаса оҙаҡ йылдар аралашҡан, фекер уртаҡлашҡан, бәхәсләшкән Рәшит ағай миңә был юлы бөтөнләй көтөлмәгән яҡтан асылды. Шул тиклем бөхтәлек, иплелек, бүлмәләшеңә ихтирам һәм иғтибар барыһы ла Рәшит Шәкүрсә, зыялылыҡтың иң ябай мәғәнәһендә, көнкүреш кимәлендә сағылышында...

Билдәле, ижад кешеләренең ошондай тупланмышында әүҙемлек эңерҙәр төшөп, төндәр еткәс башланыусан. Бер бүлмәгә йыйылып сәйҙәр эсеү, йәнле әңгәмәләр алып барыу, йырлашыу, бейешеү, күңел асыуҙар бындай саҡтарҙа таңға тиклем дауам итә...

Рәшит ағай иһә киске сәғәт туғыҙ тулып килгәндә ҡапыл йоҡларға әҙерләнә башланы. Һалдат кеүек. Сәғәт уҡтары туғыҙҙа саҡта ағайым әүен баҙарына ла юлланғайны. Өфөнән поезд менән килгәйнек, ағай арығандыр инде, тип уйлап өлгөрҙөм. Икенсе көндә лә шул уҡ хәл ҡабатланғас:

- Рәшит ағай, һеҙҙең тап ошо ваҡытта йоҡларға ятыу, ял итеү режимығыҙға әүерелгәндер, күрәһең? - тип унан һорай ҡуйҙым.

- Эйе, үҙемде шулай өйрәткәнмен. Әгәр ҙә туғыҙҙа йоҡларға ятмаһам, иртәгәһенә мин бер нәмә лә эшләй алмайым, шунан көнөм бушҡа үтә. Мөмкин тиклем күберәк эшләп ҡалырға, ниәт иткәнде яҙып өлгөрөргә

# ҮҘ ДӘҮЕРЕНЕҢ ҺУҢҒЫ МОГИКАНЫ



**Башҡорт халҡының күренекле улы, энциклопедик ҡарашлы олуғ ғалим, оҫта публицист, билдәле яҙыусы һәм шағир, тынғыһыҙ йәмәғәт эшмәкәре Рәшит Закир улы Шәкүров фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсте.**

Ул, Фенимон Куперса әйткәндә, үҙ эпохаһының һуңғы могикандарының береһе ине. Ни эшләйһең инде, әле генә шәкүрсә йылмая биреберәк, һин дә мин аралашып йөрөгән хөрмәтле шәхесебеҙ мәңгелеккә алып барған юлға сыҡты. Хәләле, балалары, яҡындары, дуҫ-иштәре, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре уны ошо юлға сыҡҡанында оҙатырға килде. Туған халҡы үҙенең Рәшит Шәкүрен юҡһынып иҫкә аласаҡ, бай ғилми һәм әҙәби мираҫына ҡаттан-ҡат әйләнеп ҡайтасаҡ. Шәкүр исемен урамдар, мәктәптәр йөрөтәсәк, Аллаһ бойорһа, уға һәйкәл дә ҡуйыласаҡ. Әлбиттә, ошо күренекле шәхес тураһында хәтирәләр ҙә һәр даим баҫылып торор, тип ышаныслы әйтергә була.

Мин шәхсән Рәшит ағай менән нисәнсе йылда һәм ниндәй шарттарҙа танышҡанымды аныҡ ҡына хәтерләмәйем. Һәр хәлдә лә, Башҡорт педагогия институтында эшләй башлаған сағымда уның башҡалар хөрмәт иткән ғалим-филолог булыуын белә инем. Рәшит Закир улын тәү мәртәбә 1989 йылдың 17 декабрендә ул саҡтағы "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайының Ҙур залында күрергә һәм тыңларға насип булды. Белеүегеҙсә, тап ошо көндә "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең ойоштороу йыйыны уҙғарылғайны. Меңгә яҡын йыйын делегаттары алдында Рәшит Закир улы "Киләсәккә ҡараш" тигән күләмле һәм тәрән фекерле доклад менән сығыш яһаны. Ул үҙенә генә хас аналитик фекерләүе, киләсәкте дөрөҫ күҙаллауы менән барсабыҙҙың да иғтибарын биләне. Ошо көндә XX быуат аҙағында өр-яңынан тергеҙелгән башҡорт милли хәрәкәтенә киң юл асылды. Беҙҙең бер төркөм зыялыларыбыҙ башлап ебәргән мәҙәни-сәйәси процесс 90-сы йылдарҙағы буталыш үә сәйәси ҡыйралыш осоронда халҡыбыҙҙың аңын һәм милли үҙаңын үҫтереү, III Башҡорт республикаһының заманса нигеҙен булдырыу йәһәтенән бик тә әһәмиәтле булды. Рәшит Шәкүр етәкләгән яңы йәмәғәт ойошмаһы башҡа күренекле шәхестәребеҙ - Дамир Вәлиев, Марат Ҡолшәрипов, Хәлил Барлыбаев, Иҙел Агишев, Мөхәмәт Исҡужин, Зөфәр Йәнекәев, Рим Ниязғолов һәм башҡа идара ағзаларының әүҙемлеге, булышлығы һөҙөмтәһендә башҡорт йәмәғәтселегенең авангардына әүерелде. Ул

✓ *Әрләшә лә, һүгенә лә белмәй, тауыш күтәргәнен дә ишеткәнем булманы. Һүгенгән кешегә фәрештәләр ҡунмай, тиҙәр. Ә инде проблемалы хәл килеп тыуһа, һәр ваҡыт төплә дәлилдәре менән алтын урталыҡты таба белә ине ул.*



тырышам, - тип яуапланы Рәшит Закир улы.

Йоҡоһона ҡарата шул тиклем иғтибарлы булған кешене ошоғаса осратҡаным юҡ ине әле. Ә бит Хоҙай биргән ғүмерҙе, уның һәр көнөн, сәғәтен, минутын ошо рәүешле һаҡсыл файҙаланыуҙың нигеҙендә үҙ халҡыңды сикһеҙ хөрмәт итеү, яратыу ятҡанлығын да аңлауы ауыр түгел. Үҙен халҡы өсөн файҙалы, кәрәкле итеп тойған, быны бар тулылығында аңлаған кеше оҙон ғүмерле булыу өсөн дә тырышлығын һалырға бурыслы бит. Сөнки уның ғүмере үҙенеке генә түгел, халҡыныҡы ла.

Оло йәштәге дуҫым, фекерҙәшем, остазым менән Мәскәүгә сәфәрҙә йөрөгәндә мин ана шул хәҡиҡәтте аңланым: үҙеңдең һаулығыңды һаҡлау, ваҡытында йоҡларға ятыу, дөрөҫ туҡланыу, физик күнекмәләр яһау, һаулыҡҡа зыянлы булған тәмәке тартыу, араҡы эсеү кеүек күренештәрҙән азат булыу - былар барыһы ла үҙеңә генә түгел, халҡыңа хеҙмәт итеүҙән дә иң мөһим һәм мотлаҡ үтәлергә тейешле йолалары. Мин бында йола һүҙен осраҡлы рәүештә килтермәйем, сөнки бер тапҡыр башҡарылған эшең - гәмәл, ике тапҡыр эшләнгәне - ҡылыҡ, көн һайын башҡарылғаны - ғәҙәт, ә ғүмер буйы башҡарылғаны - холоҡ, характер йәки яҙмышың. Бер тапҡыр

Рәшит ағайға:

- Студент саҡта ятаҡтағы бүлмәләш егеттәр күңел асырға тип аҡса йыйғанда һеҙ "ала ҡарға" кеүек ситтә тороп ҡала инегеҙме? - тип һорау бирҙем.

- Юҡ, мин дә аҡса бирә инем. Һуңынан улар эскән саҡта мин ашап ултырҙым, - тип көлдөрҙө халыҡ шағиры.

Мин һәр ваҡыт уның ғәҙәттән тыш тыйнаҡлығына хайран ҡала инем. Әрләшә лә, һүгенә лә белмәй, тауыш күтәргәнен дә ишеткәнем булманы. Һүгенгән кешегә фәрештәләр ҡунмай, тиҙәр. Ә инде проблемалы хәл килеп тыуһа, һәр ваҡыт төплө, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәре менән алтын урталыҡты таба белә ине ул. Үткән быуаттың туҡһанынсы йылдарында "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең рәйесе булып торғанында ла беҙ уның ошо сифатына һоҡлана торғайныҡ. Бик ҡатмарлы йылдар булды ул ваҡыттар...

...Халыҡ шағирының ғүмер буйына йыйған күңел хазиналары, шиғри гәрәбәләре менән танышҡас, оло хазинаға тап булғандай ҡыуанғаным хәтеремдә. Уларҙа автор донъя, тәбиғәт менән хозурланыусы лирик герой ғына түгел, ә заманға баһа биреүсе сәйәсмән дә:

*Ирәмәлдең түбәһенә менеп еттек,*
*Етеү менән, ашыҡ-бошоҡ төшөп киттек.*
*Ҡыҫҡа булды бейек тауға менеүебеҙ,*
*Әммә шул да булды беҙҙең еңеүебеҙ...*

Әлбиттә, был юлдарҙы Ирәмәл тауының башына менеп, тиҙ генә түбәнгә төшөп китеү һүрәтләнгән, күрәһең, ямғыр яуа башлағандыр, дауыл сыҡҡандыр, тип ҡабул итеүселәр ҙә табылыр. Әммә шағирҙың әйтергә теләгәне бөтөнләй икенсе: туҡһанынсы йылдарҙа илебеҙҙең күп кенә республикалары суверенлыҡ яулап, иркен һулыш алғас, күп тә үтмәҫтән быны ваҡытлыса алданыу ғына икәнлеген аңланы. Автор ошо хәлдә Ирәмәл башына менеү менән сағыштырған. Был фекер артабан алты юллыҡ шиғырҙа дауам ителәә:

*Эй, бейебеҙ-бейебеҙ,*
*Һинең көйгә бейейбеҙ.*
*Белһәк тә, белмәһәк тә,*
*Күҙгә йәш төйнәһәк тә,*
*Бейейбеҙ ҙә бейейбеҙ,*
*Бейегән булып йөрөйбеҙ.*

Был шиғырҙа шағир нимә әйтергә теләгәнен тәфсирләп тормайым. Кинәйәне аңлай-тоя белгән һәр кемгә мәғлүм был юлдарҙың аҫтында ятҡан фекерҙәр.

Йәки булмаһа, тағы ла бер дүрт юллыҡ:

*Салауаттың һәйкәленә ҡарайым да*
*Уйға ҡалам: батырҙың нәҫ йәнәшендә*
*Илаһи бер һәйкәлдә мин ҡуйыр инем*
*Салауаттың атаһына, әсәһенә.*

Шағирҙың үҙе хаҡында яҙған шиғыр юлдары бигерәк тә күңелгә яҡын:

*Шундай аҡыл йәшәп килә әлмисаҡтан:*
*Исеме лә тура килһен есеменә.*
*Мин дә бына тура юлдан барам әле,*
*Шөкөр итеп Шәкүр тигән исемемә.*

Йә булмаһа:

*Талҡаҫ күле буйында мин,*
*Ирәндектең итәгендә,*
*Рәшит Шәкүр ташы, тиеп*
*Бер ҡаяны инселәнем.*
*Тыуған ерем, һинең менән*
*Хисле лә мин, көслө лә мин.*

Ошо шиғыр юлдарына шуны ғына өҫтәге килә. Аллаһы Тәғәләнең 99 исемдәре араһында Әр-Рәшит (хәҡиҡәт юлына йүнәлтеүсе) һәм Әш-Шәкүр (рәхмәтле) тигәндәре лә бар. Донъяла бер нәмә лә, хатта бәндәнең исем-шәрифтәре лә осраҡлы булмай тиҙәр...

Рәшит ағай Шәкүров беҙгә хәҡиҡәт юлын күрһәтеп, рәхмәтле булып йәшәп, баҡый донъяға күсте. Матур кеше ине! Иң ауыр мәлдәрҙә лә йылмая белде. Дөрөҫ йәшәне. Халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың намыҫы, рухи ориентеры булды! Халҡыбыҙ йәшәгәндә уның исеме лә башҡа рухи ҡаһармандар менән телгә алынасаҡ, яҙғандары халҡыбыҙға хеҙмәт итәсәк!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## БӨРКӨТ ҠУНЫР ҠАЯ

*Ғалим һәм шағир Рәшит Шәкүргә*

Һиндә Аҡмулланың сәсәнлеге,
Риза Фәхретдиндәр ғилеме,
Салауаттың ярһыу саялығы,
Вәлидиҙең илде һөйөүе.

Йөрәгеңдә ҡояш кеүек яна
Милләтеңдең айбар таланты,
Талыу белмәй ҡаға зиһенеңдең
Аҡыллы һәм хисле ҡанаты...

Эҙләнәләр әгәр, сәбәп табып,
Башҡорт ғорурлығы ҡайҙа, тип,
Иң тәү һинә килеп ҡуныр бөркөт -
Уралдағы мәғрур ҡая тип.

**Ҡәҙим АРАЛБАЙ**
**2007.**

саҡта ошо ойошманың халыҡ араһындағы абруйы менән иң юғары власть әһелдәре лә иҫәпләшә ине. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең халҡыбыҙҙың үҫешенә булышлыҡ иткән, тотош республика мәнфәғәттәренә тура килгән ҡарарҙары, власть органдарына ебәрелгән тәҡдим-талаптары, башлыса, ҡабул ителде һәм бойомға ашырыла килде. Тап ошо ойошма барса башҡортто берләштереүҙе, киләсәктә халҡыбыҙ йәшәйешенең төп шарттарын үтәүҙе маҡсат итеп ҡуйған Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының нигеҙ ташы булды.

Р.З. Шәкүров 1995 йылда мәҙәни-сәйәси эстафетаны икенсе бер бөйөк башҡорт инсаны, олуғ тарихсы-ғалимыбыҙ Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов ҡулына тапшырҙы. Үҙенә күрә бер фәһемле күренеш булғандыр ул: башҡорт милли хәрәкәтен тәүҙә тел һәм әҙәбиәт остазы етәкләнә, сәйәсәткә ныҡ яҡын торған археолог-тарихсы ошо изге ғәмәлдәрҙе дауам итте. Ысынбарлыҡта ла шулай бит: туған телебеҙ һәм халҡыбыҙ тарихы айырып алғыһыҙ бер бөтөнлөктә төшкил итә. Нисек әйтһәң дә, ул ваҡыттағы ваҡиғалар башҡорт халҡы тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылды, һәм улар һис бер ҡасан онотолмаҫ.

Рәшит һәм Нияз ағайҙарыбыҙ иҫкә төшһә, уларҙың кешелеклеген һәм кеселеклеген айырым билдәләп үтмәй булмай. Миңә ҡалһа, уларҙың һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмая биреберәк һөйләшеүҙәре лә оҡшаш тойола ине. Икеһе лә башҡаларҙы тиң күреп аралашты, һис бер үҙҙәре билгән юғарылыҡ хаҡында уйлап та бирмәне. Шулай булғас, уларҙы ябай халыҡ та үҙ итте, уларҙың фекерҙәрен, идеяларын икеләнеүһеҙ ҡабул итте, ижади әҫәрҙәрен теләп уҡыны.

Минең үҙемә лә ошо ике шәхес ҙур йоғонто яһаны. Нияз Абдулхаҡ улы аша тарихыбыҙҙы тәрәнерәк өйрәнергә тырыштым, Рәшит Закир улының әҫәрҙәре телебеҙ һәм әҙәбиәтебеҙ даирәһенең ни тиклем киң һәм боронғо икәнен төшөндөрҙө. Шуға күрәләр инде, башҡорт фәненең ошо ике оло йөнәлеше әле лә зиһенемдә һәм күңелемдә билдә тора. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитетында эшләгән йылдарымда Рәшит һәм Нияз ағайҙар менән тығыҙ аралашып, кәңәшләшеп йәшәнек. Уларҙың хуплауы тынғыһыҙ йәмғәт эше менән шөғөлләнеүселәргә дәрт-дарман өҫтәп торҙо тиһәм, һис янылышмам.

Йәнә, Рәшит Закир улы бик тә итәғәтле, башҡаларҙы хөрмәт итә белгән заттарҙан булды. "Киске Өфө" гәзитендә уның менән күләмле әңгәмәбеҙ баҫылғайны. Байтаҡ ҡына ваҡыт үткәс, Рәшит ағайыбыҙ шылтырата: "Ҡара әле, әлеге әңгәмәбеҙҙе китабыма индерһәм, нисек булыр?" - ти. Мин аптырабыраҡ, хатта ҡаушабыраҡ ҡалдым: "Ә ни эшләп уны минән һорайһығыҙ?" - тимен. "Ни эшләп һорамаҫҡа һуң, мин һинең һорауҙарыңа яуап ҡына бирҙем, ә бит әңгәмә теҡсын һин яҙғанһың", - тип урыныма ултыртты ағайыбыҙ. Ул минең башҡорт теленең этимологияһы буйынса яҙған мәҡәләләремә лә ынғай ҡараште булды, филологтарыбыҙҙың ошо проблема буйынса тикшеренеүҙәре булмауына үкенес белдерҙе. Ошондай ихласлыҡ һәм кеселеклек бар ғалимдарҙа ла юҡтыр ул.

Рәшит ағай менән башҡаса яҡындан тороп, ихлас аралашып булмаясаҡ. Әммә уның үҙе урынына ғилми һәм әҙәби әҫәрҙәре ҡалды. Шуларҙы уҡып, йыуаныс табырбыҙ инде. Бәхил бул, арҙаҡлы ил ағаһы!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Азат ихтыяр йәки тәғәйенләнеш

Беҙ үҙ ғәмәлдәребеҙҙә азатмы әллә улар яҙмыш менән алдан яҙылғанмы? Бәхет темаһын өйрәнгән һәр кем өсөн был, ысынлап та, фундаменталь һорау. Минең яуабым һеҙҙе бәхетле итер тип уйламайым: беҙ бер үк ваҡытта азат та, яҙмышҡа ла бәйле. Аналогия үткәреп ҡарайыҡ: сәғәтенә 250 километр тиҙлек менән елгән "Формула-1" болидына идара итәһегеҙ һәм мин һеҙгә кинәт кенә һулға боролорға ҡушам. Быны эшләй алаһығыҙмы? Эйе лә, юҡ та. Шунда уҡ эшләй алмайһығыҙ, сөнки тәү сиратта тиҙлекте кәметергә кәрәк, тиҙлек кәмегәс кенә боролош яһай алаһығыҙ. Кемдер һеҙҙе шәп тиҙлектә барырға мәжбүр иттемे? Юҡ, быны өсөн һеҙ үҙегеҙҙең иркле ихтыярығыҙҙы файҙаландығыҙ. Әммә был ҡарарҙы ҡабул итеп, алдағы иркле ихтыярығыҙҙы сикләнегеҙ. Һәр саҡ, иркегеҙҙе файҙаланып, яҙмышығыҙға бәйлелек булдыраһығыҙ, сөнки яҙмышты үҙегеҙ яҙаһығыҙ. Ысынлап та азат булыр өсөн бындай ирекле файҙаланыуҙан мәңгелеккә баш тартырға кәрәк.

### Бхакти һәм джняна

Был "утрау"ҙан һеҙ киткән юлды икегә айырырға була: тоғролоҡ (бхакти) һәм белем (джняна). Тәүгеһендә һеҙ үҙегеҙҙең эгоғыҙҙы баҫтырып, хеҙмәт итеү торошона килтерәһегеҙ һәм Аллаһ (беҙҙең ысын Минебеҙ) һеҙгә килгәнгә тиклем шул халәттә ҡалаһығыҙ. Икенсеһендә эгоғыҙҙы сикһеҙ киңәйтәһегеҙ һәм ул ватылып, үҙегеҙҙең илаһи торошоғоҙҙо табаһығыҙ. Барлыҡ диндәр ҙә тоғролоҡ юлынан бара. Ниндәй юлы һайлаһағыҙ ҙа, илаһи торошҡа етәсәкһегеҙ, бары тик балды тәмләп ҡарайһығыҙмы, әллә үҙегеҙ бал булаһығыҙмы - үҙегеҙҙән тора.

Һеҙҙең илаһилыҡ менән мөнәсәбәтегеҙҙе былай аңлатып була. Яланға һыу тулы биҙрәләр ултыртылған тип күҙ алдына килтерегеҙ. Төн уртаһы. Ай тулған. Ялан эргәһендәге ҡалҡыулыҡта бала тора. Ул тулы биҙрәләргә ҡарап, ерҙә айҙың ни тиклем күп булыуын күрә. Ғәмәлдә, Ай берәү генә, ҡалғандары - уның меңдәрсә сағылышы. Шуның кеүек, Аллаһ та берәү генә. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ - бер үк илаһи сығанаҡ сағылышы. Быуна һеҙҙең ерҙәге маҡсатығыҙҙың асылы: сағыштырмаслыҡ уйынын уйнау һәм ахырҙа башта булғаныбыҙҙын яҡшыраҡ булыу өсөн ижад итеү.

### Йомғаҡлау

"Кеше тиреһендә беҙ нимә эшләйбеҙ?" - тип һорарһығыҙ. Быуның сәсәбе - беҙгә үҙенсәлекле һәләтебеҙҙе яңы мажаралар булдырыу һәм аңдың башҡа кимәлдәрен тикшереү өсөн тыуыу мөмкинлеге бирелгән. Һәм тағы: беҙ Ғаләмдән теләгән нәмәбеҙҙе һорай алабыҙ. Ә һеҙ миңә аҙнаһына 80 сәғәт эшләйһегеҙ? Миңә телевизор алдында көнөнә 4 сәғәт ваҡытығыҙҙы әрәм итәһегеҙ? Быуан ары бер минутығыҙҙы ла әрәм итмәгеҙ. Бары тик һорағыҙ һәм алығыҙ!

**Пьер МОРАНСИ.**
**(Аҙағы).**



## 1 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 Д/ф "Блокада. Дети". Памяти Тани Савичевой. [12+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
2.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**10.45 Ҡурай даны. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Дом у озера. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**

## 2 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Ат уйнатып. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Бай. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00, 5.00 Письма солдатам. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.15 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**

## 3 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 20.45 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 4.45 Автограф. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Специальный репортаж. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**

## 4 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Два берега". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". [16+]
1.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
2.30, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
3.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Лимитчицы". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Ҡурай даны. [12+]**
**10.15 Специальный репортаж. [12+]**
**10.30 Дорога к храму. [6+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 История признания. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 За себя и за того парня. [12+]**
**21.00, 4.45 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Вольная грамота". [16+]**
**3.00 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**

## 5 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.00, 20.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". [12+]
23.55 "Матадор". [18+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]
2.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Спроси Суркову".
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
4.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера".
5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.25 "Истории Большой Страны". [12+]
0.25 Х/ф "После многих бед". [12+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 18.00 Йома. [6+]**
**10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.15 Специальный репортаж. [12+]**
**12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 6.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Концерт Алены Завьяловой "Жемчужины русской культуры". [12+]**
**2.45 Спектакль "Шәүрәкәй". [12+]**
**4.30 Әлләсе... [12+]**

## 6 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Наше всё". [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Поехали!" [12+]
13.10 Д/ф "Кто сказал: "У меня нет недостатков"?" Памяти Владимира Меньшова. [12+]
14.10 Х/ф "Ширли-мырли". [16+]
16.55 Д/ф Премьера. "БАМ: слабый уйдет, сильный останется". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
20.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 Торжественное закрытие выставки "Россия". [0+]
23.20 Х/ф Премьера. "Сядь за руль моей машины". Премия "Оскар" за лучший фильм на иностранном языке. [18+]
2.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Триггеры". [16+]
3.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". [16+]
4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Три девицы". [12+]
0.30 Х/ф "Качели". [12+]
4.05 Х/ф "Ой, мамочки..." [12+]
5.51 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Ҡурай даны. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30 Ете егет. [12+]**
**9.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 Ат уйнатып. [6+]**
**10.30 Елкән. [6+]**
**11.00 Тирмәкәй. [6+]**
**11.15 Атайсал. Знай наших! [6+]**
**11.45 Сулпылар. Финалисты-2023. [6+]**
**12.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**12.30 Күстәнәс. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**17.15 Концерт "Все песни о прекрасном". [12+]**
**19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Т/с "Бирешмә!" [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Ҡурай-шоу. [12+]**
**0.15 Х/ф "Просто Саша". [16+]**
**2.15 Спектакль "Не улетайте, журавли!". [12+]**
**3.45 Тормош. [12+]**
**6.00 История одного села. [12+]**

## 7 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Космические истории". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
16.15 Премьера. К юбилею Жанны Фриске. [16+]
17.05 Д/ф Премьера. "Жанна Фриске. Улыбка на память". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Премьера. "Обоюдное согласие". [18+]
0.00 Д/ф Премьера. "Царица мозга". К 100-летию со дня рождения Натальи Бехтеревой. [12+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
2.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Все хотят летать". [16+]

### РОССИЯ 1

6.10, 1.05 Х/ф "Любовь и немного перца". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Виктория". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Сулпылар-2024. [6+]**
**11.00, 11.15 Атайсал. Знай наших! [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Живая аптека. [16+]**
**15.00, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**15.15 Дорога к храму. [6+]**
**15.45 Честно говоря. [12+]**
**16.30 Сольный концерт Аскара Абдразакова. [12+]**
**18.30 Письма солдатам. [12+]**
**19.00 Патриот РФ. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00 Автограф. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 4.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Салауат йыйыны. [12+]**
**0.15 Х/ф "Безымянная звезда". [16+]**
**2.30 Спектакль "Чужой ребёнок". [12+]**
**5.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445-1446 һижри йылдар.*

| Июль (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (25) дүшәмбе | 2:42 | 4:46 | 13:30 | 19:04 | 21:53 | 23:58 |
| 2 (26) шишәмбе | 2:42 | 4:47 | 13:30 | 19:04 | 21:52 | 23:58 |
| 3 (27) шаршамбы | 2:43 | 4:47 | 13:30 | 19:04 | 21:52 | 23:58 |
| 4 (28) кесе йома | 2:44 | 4:48 | 13:30 | 19:04 | 21:51 | 23:57 |
| 5 (29) йома | 2:44 | 4:49 | 13:30 | 19:03 | 21:51 | 23:57 |
| 6 (30) шәмбе | 2:45 | 4:50 | 13:30 | 19:03 | 21:50 | 23:57 |
| 7 (1) йәкшәмбе | 2:46 | 4:51 | 13:30 | 19:03 | 21:49 | 23:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Хәҙерге ваҡытта Союздың ижади составында Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Нефтекама, Мәләүез ҡалаларынан, урындағы ижади берекмәләрҙән 224 рәссам һәм сәнғәт белгестәре эшләй.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 1 ИЮЛЬ - БАШҠОРТОСТАН РӘССАМДАР СОЮЗЫНА 90 ЙЫЛ

**1934 йылдың 24 июлендә "Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзитендә шундай хәбәр баҫыла: "Башҡортостан рәссамдары БАССР рәссамдары союзына ойошто". Тиҙҙән, илдең башҡа төбәктәрендә кеүек үк, был ойошма ла ҡала атамаһын ала - Өфө ҡала совет рәссамдары союзы. Ә 2002 йылдан һөнәри берләшмә "Рәсәй Рәссамдар союзы" Бөтә Рәсәй ижади ижтимағи ойошмаһының Башҡортостан Республикаһы төбәк бүлексәһе тип йөрөтөлә һәм быйыл үҙенең 90 йыллығын билдәләй.**

Башҡортостан һынлы сәнғәте хаҡлы рәүештә айырым бер урын алып тора: ул башҡа һөнәри художество ижад төрҙәренә ҡарағанда иртәрәк барлыҡҡа килгән, үҙен Рәсәй һәм донъя кимлегендә раҫлаған һәм төрлө тарихи этаптарҙа үҫешендә донъяға милли ҡарашты айырыуса асыҡ сағылдыра. Башҡорт рәсем сәнғәтен бер нисә быуын рәссамдары барлыҡҡа килтерә, улар араһында милләте буйынса башҡорт булмағандар ҙа байтаҡ.

Шүлгәнташ мәмерйәһендәге боронғо һүрәттәр, Арҡайым мәҙәниәте, сармат сәнғәте, башҡорт халыҡ сәнғәте Көньяҡ Уралдың бай матди һәм рухи мәҙәниәтен хасил итә. Нәҡ Шүлгәнташ мәмерйәһе ата-бабаларыбыҙҙың рәсем сәнғәтенә меңәр йыл элек тә яҡын тороуын сағылдыра. Үҙ эшмәкәрлеген революцияға тиклемге Башҡортостанда уҡ башлаған оло оҫталар ижады башҡорт сәнғәтенең юғары һөнәри кимәле һәм рухиәтенә нигеҙ һала. Башҡортостан рәссамдары союзы ил күргәнде күрә, халыҡ менән бергә беренсе бишйыллыҡтар, һуғыш йылдары, идеология диктатының ҡаты күрһәтмәләр заманы ауырлыҡтарын күтәрә. Әммә рәссамдарҙың ижади ҡомарын күтәреүсе, күргәҙмәләр үткәреүсе, йәш кадрҙарҙы тәрбиәләүсе үҙәк булыуҙан туҡтамай. Төрлө йылдарҙағы күргәҙмәләрҙә йәш рәссамдар ҙа ҡатнаша һәм башҡорт рәсем сәнғәтен артабан үҫтереүсе оҫталар шулай тәрбиәләнә. Хәҙерге ваҡытта Союздың ижади составында Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Нефтекама, Мәләүез ҡалаларынан, урындағы ижади берекмәләрҙән 224 рәссам һәм сәнғәт белгестәре эшләй. Бынан тыш, Союз эргәһендә Йәш рәссамдар һәм сәнғәт белгестәре берекмәһе эшләп килә. Башҡортостан рәссамдар союзының тәүге етәксеһе Усманов Мәхмүт Дауыт улы, артабан ижади берекмәне төрлө йылдарҙа А.П. Лежнев, К.И. Герасимов, И.И. Урядов, Р.У. Ишбулатов, М.Н. Арыҫланов, А.Т. Платонов, Т.П. Нечаева, Б.Д. Фезеев, Ғ.Ш. Имашева, Р.М. Нурмөхәмәтов, Э.М. Сәйетов, З.Р. Басиров, И.И. Фартуков, А.А. Холопов, Н.А. Калинушкин, А.А. Дворник, З.Ғ. Ғаянов етәкләй. Ә 2005 йылдан бөгөнгәсә ижади берекмәнең етәксеһе Хатип Сәрүәр улы Фазылов.



1 — Башҡорттарҙан тәүге рәссам, "Зәңгәр күлдәкле ҡыҙ" авторы



2 — Башҡорт тәбиғәтен һәм көнкүрешен мәңгеләштергән тәүге рәссам, "Ҡатын-ҡыҙҙар яғында ҡунаҡ" авторы

Үҫемлек ебе. Юридик орган. 1. 2. Ә. Хәкимовтың романы. Тинейджер үҙебеҙсә. Пляждағы һары байлыҡ. "(...) алғанда, еңгә йыйғанда яҡшы". 3. Йондоҙнамә "фәне". Ваҡ сөсө икмәк. Боронғо ныҡытма. Төндә һунар иткән ҡош. Үлгән тел. "Уҡ етмәҫ ергә (...) менән һелтәнмә". "Илдә (...) үлмәҫ". "Ҡаҙандан ҡапҡас китһә, эттән (...) китә". Батша Рәсәйендә кесе офицер чины. Борис Пастернак табибы. Татарҙың әсәһе. Ҡыйыҡ буйындағы арҡыры таҡта. "(...) - ярты ғәмәл". ⌘. ⌘. Буяу оҫтаһы. Формоза утрауы хәҙер. Баҡыйлыҡҡа күсерҙән алда әйткән һүҙ. 4. Хужабикә "ҡоралы". Дүҫ терәге. Битум. "Аптыраған ҡатын (...)һын "атай" тигән". Стеналағы уйым. Юл күрһәтеүсе. "(...) айыуға ла аҡыл өйрәтә". Яҫы мөгөҙлө хайуан. БДИ баһаһы. Феонаның иптәше. ⌘. Намаҙға саҡырыу. Нота.



3 — "Башҡорт неореализмы"н тыуҙырған рәссам, "Өс ҡатын" авторы



4 — Әҫәрҙәрен Өфөгә арнаған рәссам, "Сәскәгә күмелгән тәҙрәләр" авторы

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**24-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бағыр. Алабуға. Отҡо. Бурыс. Ҡырпа. Ауыҙлау. Һаҙан. Шамбы. Атилла. Бәрҙе. Каа. Тарат. Нәмә. Иҙел. Тромб. Йод. Тәкә. Аслыҡ. Йәйен. Тыумаса. Наянлыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Һөмбаш. Буҙтурғай. Немезида. Алты. Суртан. Сабаҡ. Браво. Каллы. Ҡорман. Ҡыҙылғанат. Әҙрәс. Руан. Аяҡ. Ҡуш. Тәтәй. Алҡа. Бала. Аты. Табан.

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## ЗАЯТҮЛӘК МЕНӘН ҺЫУҺЫЛЫУ




**28 июндә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Мәжит Ғафуриҙың "Заятүләк менән Һыуһылыу" повесы буйынса спектаклдең премьераһы була.**

Пьесаның авторы - Мария Малухина, ҡуйыусы режиссёр - Илсур Ҡаҙаҡбаев, ҡуйыусы рәссам - Анна Бубнова, композитор - Магуля Мезинова, хореограф - Илья Козичев, рәссам-яҡтыртыусы - Сергей Скорнецкий, визуаль эффекттар буйынса рәссам - Михаил Теребиленко, башҡорт теленә тәржемәсе - Динара Ҡәйүмова. Театрҙың матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, "Заятүләк менән Һыуһылыу" спектаклендә легендар батыр Заятүләк менән Асылыкүл батшаһының ҡыҙы Һыуһылыуҙың мөхәббәте хаҡында бәйән ителә. Боронғо эпостарҙағы кеүек, хәл-ваҡиғалар ерҙә генә түгел, һыу аҫты донъяһында ла бара. Ике батшалыҡ араһында оҙаҡ йылдар дауам иткән дошманлыҡ яңы кимәлгә сыға - яҡындарының үлеме өсөн үс алырға теләп, яҡтарҙың һәр ҡайһыһы һуғышҡа әҙерләнә. Быға Заятүләк менән Һыуһылыу араһында тоҡанған һөйөү хистәре генә ҡаршы торорға мөмкин. Сағыу костюмдар, йыр-бейеү тамашасыларға башҡорт эпосының серле донъяһына сумырға мөмкинлек бирә. Спектакль рус теленә синхрон тәржемә ителә.

## БЕТЕҮ

**Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһында махсус хәрби операция темаһына ҡыҫҡа метражлы уйын фильмы өҫтөндә эш башланды.**

Әлегә фильмдың исеме - "Бетеү". Режиссеры һәм идея авторы иһә тамашасыларға "Өс хат", "Кластан тыш дәрес" фильмдары, "Күршеләр" сериалы менән билдәле булған Руслан Юлтаев. Киностудияның матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, сюжет буйынса героиня берҙән-бер ейәнен махсус хәрби операцияға хеҙмәт итергә ебәрергә теләмәй. Уны туҡтатыу өсөн ул бетеүҙе алып ҡала. Үҙенең хатаһын аңлағас, бетеүҙе гуманитар ылау менән тапшырырға тырыша, әммә был еңелдән булмай. Ижади команданың бер өлөшө локациялар эҙләргә юлланған. Фильм күркәм тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан Ишембай районында һәм унда йәшәгән халыҡтың өйҙәрендә төшөрөлә. Бынан алдараҡ Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡаланың 450 йыллығы айҡанлы "Өфө һәм өфөләр" фильмы күрһәтелгәйне.

## ҠОШ ЮЛЫНА...

**12-14 июлдә Ейәнсура районында "ҠошЮлы" республика автор йыры фестивале ойошторола.**

Фестивалдең тәүге көнөндә дөйөм усаҡ янында һайлап алыу туры була. Шулай уҡ бында шиғриәт байрамын үткәреү ҡаралған, тип хәбәр итә ойоштороусылар. Фестиваль программаһында "ҠошЮлы. Балалар" тигән пункт та бар. 12 июлдә "Ал елкән" лагерында еңеүсе фестивалдең финал концертында сығыш яһай. "ҠошЮлы" фестивале билдәле музыкант, композитор, "Рух" рок төркөмөн ойоштороусыларҙың береһе Ирек Атановтың иҫтәлегенә арнала. Ул 2023 йылда арабыҙҙан китте. Былтыр фестиваль композитор, баянсы Илшат Яхиндың иҫтәлегенә бағышланғайны.

АФАРИН!

# БАЛАЛАР ТЕЛЕНДӘ...

## Урал батыр васыяты



(Башы 1-се биттә).

- "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең төбәк-ара конкурсында жюри ағзаһы булараҡ йыш ҡатнашманым, әммә былтырғыһы менән сағыштырып әйтә алам: быйыл балалар тағы ла нығыраҡ әҙерләнеп килгән, эпосты тулыһынса ятлағандар ҙа күберәк булды. "Урал батыр" эпосы - башҡорт халҡының генетик, географик паспорты ла. Беҙҙең быуынға уны мәктәптә үк өйрәнеү эләкмәне, хәҙерге балалар был йәһәттән күпкә бәхетле. "Урал батыр" эпосы менән бергә генетик кодты - ҡотобоҙҙо һаҡлауыбыҙ тураһында онотмаҫҡа һәм Яҡутстандан өлгө алып, олонхо өйрәнеүселәрҙе наградлаған кеүек, башҡорт ҡобайырҙарын яттан белгәндәрҙе лә күтәрмәләү кәрәк, - тине конкурстың жюри ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлгөнә Баймырҙина.

"Урал батыр" эпосын һәм башҡа эпик әҫәрҙәрҙе сәхнәләштереү" номинацияһы ла конкурстың төп һынауҙарының береһе. Башҡорт халыҡ эпостары геройҙарын кәүҙәләндергән балалар йыл да бер матур образ тыуҙырып, актерлыҡ һәләттәре менән хайран итеп, тамаша залындағыларҙың күңелдәрен арбай килә. Быйыл мәктәпкәсә йәштәге һәм башланғыс класта уҡыусы балалар араһында I урынды - Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы "Тирмәкәй" балалар баҡсаһы, II урынды - Йылайыр районы Юлдыбай ауылы "Ләйсән" балалар баҡсаһы, III урынды Дыуан районы Әбдрәшит ауылы башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы фольклор коллективтары яуланы. Ә бына өлкәнерәк класс уҡыусылары араһында I урынға Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе, II урынға "СМАРТ" 2-се республика полилингваль күп профилле гимназия, Белорет ҡалаһының Я. Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһы, Стәрлетамаҡ ҡалаһы Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия, III урынға Өфө районы Шамонино урта мәктәбе, Борай районы Борай ауылының 1-се урта мәктәбенең икади коллективтары лайыҡ булды.

Был балалар араһында "Ир-егет ролен яҡшы башҡарыусы" номинацияһында Белорет ҡалаһының Я. Хамматов исемендәге гимназияһынан Ильяс Шаһиязданов, Йылайыр районы Юлдыбай ауылы "Ләйсән" балалар баҡсаһынан Азат Мостафин бүләкләнде. Ә бына "Ҡатын-ҡыҙ образын яҡшы башҡарыусы" тип Стәрлетамаҡ ҡалаһы Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназиянан Айлина Дәүләткилдина, Иглин районы Иглин ауылы 5-се урта мәктәбенән Мәҙинә Байғусҡарова табылды. "Иң яҡшы костюмлаштырылған образ" номинацияһында Әбйәлил районы Аҫҡар ауылының "Тирмәкәй" балалар баҡсаһынан Ралина Сәйетгәлина, Октябрьский ҡалаһының 3-сө гимназияһынан Әминә Бәширова еңеү яуланы.

- Беҙ Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбенең "Тарпандар" фольклор төркөмө ағзалары һәм был конкурста икенсе йыл рәттән ҡатнашып, беренсе урын яулайбыҙ. Былтыр Урал батырҙың Ҡатил батша илендәге батырлыҡтарын күрһәтһәк, быйыл эпостың аҙаҡҡы юлдарында бәйән ителгән ваҡиғаларға туҡталып, Урал, Иҙел, Нөгөш, Яйыҡ, Һаҡмар батырҙарҙың образын кәүҙәләндерҙек. Урал батырҙың тыуған төбәге Бөрйәндән, Шүлгәнташ мәмерйәһе урынлашҡан ерҙән булараҡ, эпос беҙҙең күңелдәрҙә йәшәй һәм уны сәхнәгә сығарыу беҙҙең өсөн оло ҡыуаныс. Етәксебеҙ Фирүзә Фәрит ҡыҙы Кинйәбулатова менән әҙерләндек. Барыбыҙ ҙа унынсы класты тамамланыҡ, әлегә киләсәгебеҙ үҙебеҙ өсөн дә билдәһеҙ булһа ла, ҡайһы өлкәлә эшләһәк тә тыуған телебеҙҙе онотмаҫҡа, илебеҙгә файҙалы кешеләр булып үҫергә ниәт иткәнбеҙ. Был конкурс халҡыбыҙҙың мираҫын өйрәнеү, илһөйәр итеп тәрбиәләү йәһәтенән баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтле, - тине Илтимер Мырҙаголов һорауҙарға яуап биреп. Уның менән бергә Алик Хәкимов, Гәзинур Манапов, Арыҫлан Күлбаев атлы егеттәр сығыш яһаны һәм барлыҡ тамашасыны хайран иттеләр.

- "Урал батыр" эпосын ятлаған балаларҙың ниндәй оҫталарға ингәнен беләбеҙ. Әҫәрҙәге 40-ҡа яҡын образды улар шул тиклем оҫта кәүҙәләндерә ала, сөнки һәр береһенең халәтен аңлайҙар. Шуға был балаларға шиғри юлдарҙы хәтерҙә ҡалдырыуы ла, сәхнәлә уйнауы ла енелләшә. Тимәк, улар халыҡ театры сәнғәтенен, дала театры сәнғәтенең тәүге төп элементтарын беләләр, төшөнәләр. Егерме алтынсы йыл үткәрелгән конкурста баштан уҡ эпосты сәхнәләштереү мөмкинлеге юҡҡа булдырылманы: бөгөн беҙ Урал батыр, Ҡатил батша, Шүлгән, Зәрҡүм, Һомай, Айһылыу образдарын тәрән итеп төшөнөргә тырышҡан бик күп малай-ҡыҙҙарҙы күрәбеҙ. Уларға ҡарап, Урал батыр эпосынын балалар театрын булдырырға ваҡыт еткәнлеген дә төшөнәбеҙ. Был театрҙа эпосты тулыһынса ятлаған балалар һәм йәштәр, ә уларҙың һаны бөгөн 480-гә еткән, ҡатнашыр ине. Ул даими уйнап торған, төрлө төбәктәр буйлап сәйәхәт иткән күсмә театр булыр ине, ә артистар һәр төбәктә табыласаҡ. Ошо театрҙың "Урал батыр" эпосының фәлсәфәһен халыҡ тағы ла нығыраҡ аңларлыҡ, был эпосты ятлаған балаларҙы бар гәмгә күрһәтерлек итеп эшләүен телә́йем. Артынан әйәреп йөрөп ҡарар инек, билләһи. Ул яҙылған әҫәрҙәрҙе уйнаған театр түгел, ә ысын халыҡ театры булыр ине. Әле үк балалар әҙерләп килгән инсценировкаларҙың тәбиғилеген күрәбеҙ, халыҡ аңында гәмәлдәре, характерҙары менән шул тиклем тотороҡло, мәңгелеккә оташҡан эпик образдар үҙгәрмәйенсә күҙ алдына баҫа. Беҙҙең Урал батыр, Тараул ҡарт, Самрау батша, Ҡатил батша һ.б. боронғо гректарҙың Гераклы, Зевсы, Прометейы кеүек танылыу образдар. Әле балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе булған "кескәй Урал батыр"ҙар ҙа хәтергә уйылып ҡала, үҙ булмыштары, фекерҙәре менән Урал батыр образына барып тоташҡан балалар бар. Нәҡ шуларҙы бер урынға туплар ине Урал батыр театры, - ти конкурстың жюри ағзаһы, журналист һәм драматург Сәрүәр Сурина. Ул шулай уҡ конкурс ойошторолған өс тиҫтәгә яҡын ваҡыт эсендә республикабыҙҙа "Урал батыр" эпосы мәктәптәре барлыҡҡа килеүен, был өлкәлә шәхес-уҡытыусыларҙың эшмәкәрлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм халыҡ эпосын уҡыусыларына өйрәткән педагогтарҙың һәр береһе Салауат Юлаев ордены менән наградланырға лайыҡ, тип билдәләне.

"Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең төбәк-ара конкурсы сиктәрендә Өфөнөң 450 йыллығына һәм Салауат Юлаевтың тыуыуына 270 йыл тулыуға арналған шиғыр һөйләүселәр һәм видеоязма төшөрөүселәр конкурсы ла ойошторолған. Был ярышта Башҡортостан уҡыусыларынан тыш, Запорожье өлкәһенең Васильевский районы Днепрорудный ҡалаһы, Каменско-Днепровск районы Новоднепровка ауылынан килгән биш уҡыусы ла ҡатнашты. Карина Юртина, Анастасия Выровуб, Елизавета Пощикайло, Арина Томиль, Полина Ляльченко исемле ҡыҙҙар "Урал батыр" эпосының Айҙар Хөсәйенов прозаға һалған вариантын рус һәм украин телдәрендә башҡарған. Уларҙың сығыштарын жюри ағзалары бик юғары баһалаған һәм ҡыҙҙар призлы урындар яулаған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең төбәк-ара конкурсының йомғаҡлау тантанаһы унда ҡатнашҡан балаларҙың дөйөм сығышы менән башланғайны. Халҡыбыҙҙың үткәнен һәм бөгөнгөһөн, киләсәген берҙәй сағылдырған тамашалар араһында ошо күренештән дә бөйөгөрәге, күңелгә ятышлыһы булмауына төшөндөк. Күңелдәренә халҡының быуаттар төпкөлөнән килгән аң-белемен, тел байлығын, фәлсәфәһен һеңдереп үҫкән һәм сәхнәләрҙән яңғыратҡан быуын кешеләре үҙҙәре лә рухи юғарылыҡҡа өлгәшер һәм вариҫтарын да унан мәхрүм итмәҫ, тигән инаныстабыҙ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕЛЕМЛЕ КЕШЕ...

## күккә ашыр

Һары мәтрүшкә - алтмыш төрлө ауырыуға, көрән мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуға дауа.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхәстәрһеҙ донъя бик күңелһеҙ булыр ине. Бар тере йән тураһында фекер алышыу, бәхәсләшеү кәрәк.

**(Чарли Чаплин).**

Ҡыҙ-ҡатындар матур итеп кейенергә, шул кейем аҫтындағы тәненең бер өлөшөн күрһәтеп-күрһәтеп алырға һәм шуның менән үҙенең табыныусыларына уны ҡасан да булһа бер тулыһынса күреү өмөтө бирергә ярата. Тәбиғәт тә ҡатын-ҡыҙ һымаҡ...

**(Дени Дидро).**

Бары тик йөрәк кенә барыһын да күрергә һәләтле. Иң мөһимен күҙҙәр менән күреп булмай.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Яҙмыш беҙҙең ҡылыҡтарҙың ҡап яртыһы менән идара итә, ҡалған яртыһы менән идара итеүҙе беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡалдыра.

**(Николло Макиавелли).**

Ҡағиҙәләрҙе күҙәтеүҙән туҡтаһаҡ, беҙ юғалып ҡалабыҙ һәм нимә эшләргә лә белмәйбеҙ. Ҡағиҙәләргә буйһоноп йәшәйек.

**(Людовик Бурбон).**

Беҙҙең тормошобоҙҙағы күңелһеҙлектәрҙең яртыһы "Юҡ" тигән һүҙҙе тиҙ генә әйтмәй, "Эйе" тигәнен тиҙ генә әйтеү менән бәйле.

**(Бернард Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер изге әүлиә океан яры буйында йөрөп ятҡанда уның эргәһенә йәш кеше килә һәм шулай тип һорай:**

**- Мин көн дә һинең ошонда бер хәсрәтһеҙ һәм хәстәрһеҙ йөрөп ятҡаныңды күрәм. Шул уҡ ваҡытта тирә-яғында күпме ҡайғы-хәсрәт, хәйерселек хөкөм һөрә. Һин бит шул тиклем ҡеүәтле кешеһең һәм һинә ошо океан һыуын нефткә әйләндереү бер ни тормай. Шуны эшләһәң, беҙҙең ил кешеләре был тиклем фәҡирлектән ыҙа сикмәҫ ине!**

**Йәш кешенең был йән асыуы менән әйтелгән һүҙҙәренә ҡаршы әүлиә шулай тип яуап бирә:**

**- Эйе, мин ысынлап та океандағы һыуҙы нефткә әйләндерә алыр инем. Ләкин ул ваҡытта был океанға шырпы ташлауҙы бер аҡылһыҙ әҙәм мотлаҡ табыласаҡ бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идараһында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1582218911006 24025

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Ләйсән ВӘЛИЕВА, Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 112100